# АМАНАТ

2010
Октябрь

РЕСПУБЛИКА ЙЫЛЫ 1990 2010 ГОД РЕСПУБЛИКИ

**Сингапурҙа үткән Беренсе үсмерҙәр олимпиадаһының бронза призеры Гөлназ ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА**



PENTATHLON

Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!

# Башҡортостан Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителеүгә – 20 йыл




## ИЛЕБЕҘ – БАШҠОРТОСТАН

**Беҙ, Ишембай ҡалаһының 8-се Башҡорт мәктәбенең 5-се синыф уҡыусылары, “Аманат” журналын бик ҙур түҙемһеҙлек менән көтөп алабыҙ. Башҡорт теле уҡытыусыбыҙ Мәҫкүрә Зәйләғи ҡыҙы менән дәрестәрҙә лә журналды уҡыйбыҙ. Башҡортостандың дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителеүгә 20 йыл тулыуға ҡарата беҙ үҙебеҙҙең илебеҙ тураһында фекерҙәребеҙҙе “Аманат” журналына тәҡдим итергә булдыҡ.**

**Элмир Йәнбирҙин:**

Мин Ишембай ҡалаһында тыуҙым. Ҡаламды бик яратам. Ишембай – таҙа, йәшел ҡала, ул ағастарға, сәскәләргә бик бай. Көндән-көн матурлана, үҫә. Быйыл ҡалабыҙҙа ҙур спорт комплексы, сауҙа үҙәге асылды.

Аллы-гөллө сәскәле
Ишембайым, минең матурым.
Һиндә минең бар күңелем,
Һиндә үтер һәр көнөм.

**Лилиә Рәхимова:**

Минең Ватаным – ул туған мәктәбем, Ишембай, бар Башҡортостан. Мин уларҙы бик яратам. Тыуған яғымдың ағып ятҡан шишмәһе генә лә тәмле. Һәр иртәһе тыныс: зәңгәр һауа, күбәләктәр оса, ҡоштар һайрай. Мин Ватанымды бик тә яратам.

**Рушана Аскарова:**

Шишмә һыуҙарының шифаһын тойоп үҫәм. Бал ҡорттары ла иҫ китмәле татлы шифалы бал менән һыйлай. Ул бейек тауҙар, үләндәр, емеш-еләктәр, йылғалар, яландар, сәскәләр... Барыһы ла ҡояш кеүек йылмая. Ошолай иң-иң матуры, гүзәл итеп күрәм мин Ватанымды.

**Артем Наговицын:**

Беҙҙең Ватаныбыҙ, иң ҙур байлығыбыҙ – Башҡортостан, йәғни, башҡорт иле. Ниндәй генә байлыҡ юҡ унда! Болоттарға ашҡан ҡаялар ҙа, дауылда диңгеҙҙәй ярһыған күлдәр ҙә бар унда. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҙа ошо ерҙә бик боронғо замандарҙан бирле йәшәгән. Шуға ла мин бөгөн барыһына ла өндәшәм: ярат һәм һаҡла Башҡортостаныбыҙҙы, сөнки ул һинең дә тыуған илең!

## БАШҠОРТОСТАНЫМ

Мин бәхетле, сөнки минең
Тыуып-үҫкән ерем, илем бар.
Ғорурланып әйтә алам:
Башҡортостаным – минең бар!

Бөйөклөгө тыуған-үҫкән илдең –
Карталарға һыймаҫ киңлеге.
Матурлығы яратҡан илемдең
Барығыҙға һеҙҙең билдәле.

Йыр-ҡошсоҡто ебәрәм һеҙгә лә.
Кешеләрем, һеҙ ҙә тыңлағыҙ.
Аңларһығыҙ микән һөйөүемде?
Аңлаһағыҙ, һеҙ ҙә йырлағыҙ.

Беҙҙең йырҙар, ҡушылып бергә-бергә,
Урап сыҡһын тауҙы, урманды.
Бергә булһаҡ ҡына беҙ еңербеҙ
Ғәзиз ергә килгән дошманды.

Беҙ тупланһаҡ, илебеҙ нығыныр,
Бергә булһаҡ ҡына – ил булыр.
Дәүләт көслө була халҡы менән,
Шунда ғына ил дә – гөл булыр.

**Илүсә ҺӨЙӘРБАЕВА.**
**Миәкә районының**
**Елдәр урта мәктәбе.**

## ТИКШЕРЕҮ МОТЛАҠ БУЛАСАҠ

2011 йылдан Башҡортостанда мәктәп уҡыусыларын, студенттарҙы наркотик ҡулланыуға тикшереү мотлаҡҡа әйләнәсәк. Өфөлә уҡыусыларҙы ирекле рәүештә тикшереү тәжрибәһе бар. Ирекле рәүештә булғанда тикшереүҙе ата-әсә хәл итә ине, хәҙер барыһына ла мотлаҡ булғас, ул ябай медосмотр рәүешендә генә үтәсәк.

Наркотиктарға тест үтеү ҡатмарлы түгел: дауаханаға ғәҙәттәге анализдар тапшырыла һәм улар ҡағыҙ лакмус күрһәткесе ярҙамында тикшерелә. Артабан уҡыу йорттарына ингәндә лә документтарға наркотест күрһәткестәрен өҫтәргә кәрәк буласаҡ, тип фаразлана.

## ЕВРОПАЛА – БЕРЕНСЕЛӘР

Болгарияла үткән Йәштәр араһында халыҡ-ара шашка буйынса Европа беренселегендә Өфөнән Айнур Шәйбәков менән Ишембайҙан Айгөл Иҙрисова чемпион исемен яуланы. Өфөнән уларҙың тиҫтерҙәре Юлиә Вәлиева көмөш миҙал яуланы, ә Рим Ишмәтов өсөнсө урынға сыҡты.



## ЫШАНЫС ТЕЛЕФОНДАРЫ ЭШЛӘЙ

Башҡортостанда балаларға психологик ярҙам хеҙмәте – балалар ышаныс телефоны эшләй башланы. 246-12-12 номеры менән БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы янындағы социаль приют дәүләт учреждениеһы белгестәре менән бәйләнешкә инергә, кәңәштәр һәм ярҙам алырға мөмкин.

273-09-00 телефоны буйынса иһә БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы янындағы Ғаиләгә, балаларға һәм йәштәргә социаль-психологик ярҙам республика үҙәге белгестәре менән бәйләнешкә инергә була.

8-800-2000-122 телефоны аша ашығыс психологик ярҙам хеҙмәте белгестәре менән бәйләнешкә инергә мөмкин. Телефондар тәүлек әйләнәһенә эшләй.

## БЕҘ “АМАНАТ”ҠА ЯҘЫЛДЫҠ, Ә ҺЕҘ?!



“Аманат” журналын яратып уҡыйбыҙ. Тиҫтерҙәрҙең ижады менән танышабыҙ, кроссвордтарын сисәбеҙ. Башҡорт теле, Башҡортостандың тарихы һәм мәҙәниәте дәрестәрендә бик күп ҡыҙыҡлы мәғлүмәт алабыҙ. Ә 2011 йылда “Аманат”ты беҙ тотош синыф менән алдырасаҡбыҙ.

**Дүртөйлө районы Яңы Бейектау мәктәбенең**
**5-се синыфы уҡыусылары.**
**Етәксебеҙ – Зөлфиә Хәмит ҡыҙы Шәңгәрәева.**

Беҙ һеҙгә шатлыҡлы хәбәр еткерәбеҙ: алдағы йылға бөтөн синыф менән “Аманат” журналына яҙылдыҡ. Мәктәптә үткәрелгән сараларҙа ла бик әүҙембеҙ. Әле яңыраҡ ҡына Сәскәләр байрамында һәм Гуманитар фәндәр аҙналығында II урын алдыҡ. Күңелле йәшәйбеҙ һәм киләсәктә “Аманат” журналы менән дә хатлашып торорбоҙ, тип ышандырабыҙ.

**Бөрйән районы Байназар мәктәбенең**
**5-се “Б” синыфы уҡыусылары.**
**Етәксебеҙ – Фәниә Солтангәрәй ҡыҙы Яҡшыбаева.**



“Аманат” журналы шул тиклем ҡыҙыҡлы, файҙалы, мәғлүмәттәргә бай. Журнал беҙҙә күп нәмәгә өйрәтә, уны һағынып көтөп алабыҙ. Журналды сығарған апай-ағайҙарға ҙур рәхмәт.

*Яҙылырға онотмайыҡ*
*“Аманат” журналына!*
*Синыф менән бергәләшеп,*
*Саптыҡ почта яғына.*

**Әбйәлил районы Байым мәктәбенең**
**3-сө “Б” синыфы уҡыусылары.**
**Етәксебеҙ – Фәриҙә Әнүәр ҡыҙы Йосопова.**

## Тиҫтерҙәрең ижады

РЕСПУБЛИКА ЙЫЛЫ 1990 2010 ГОД РЕСПУБЛИКИ

2010 УҠЫТЫУСЫ ЙЫЛЫ

## Башҡортостан

Башҡортостан – тыуған ерем,
Ғәзиз башҡалам – Өфөм.
Шунда үтһен һәр бер тыныс
Һәм яҡты, матур көнөм.

Башҡортостан – тыуған ерем.
Һинең бейек тауҙарың.
Шул матур тауҙар артында
Минең тыуған ауылым.

**Айгөл ЯХИНА.**
**Әбйәлил районының**
**Ырыҫҡужа ауылы.**

## Әхирәтемә

Бер көн күрмәһәм дә,
һағынам,
Бар серҙәрем һыймай күңелгә.
Ауырлыҡтар килеп юлға торһа,
Беҙ үтербеҙ уны гел бергә.

Бер алманы
бүлешкәндәй,
Хыялдарыбыҙ ҙа – бер бөтөн.
Тормош юлын үтеү
һәр саҡ еңел,
Дуҫтар янда булһа һәр бер көн.

Киләсәктә яҙмыш икебеҙҙе
Айырыр шул төрлө яҡтарға.
Тик онотмам һине мәңгелеккә,
Бергә булдыҡ үҫмер саҡтарҙа.

Дуҫлыҡ күперебеҙ
осраштырыр,
Дуҫым булһа – донъям түңәрәк.
Ҡайҙа йөрөһәм дә, әхирәтем,
Кәңәштәрең булыр ҙур терәк.

**Айгөл ЮНЫСОВА,**
**“Аманат” тың йәш хәбәрсеһе.**
**Хәйбулла районының**
**Ғәлиәхмәт ауылы.**

## Ике Самат

Ике Самат бергә уйнай,
Һис айырыла алмайҙар.
Килеп сыға шундай хәлдәр –
Ыҙғышып та алалар.

Ыҙғыштары күпкә бармай,
Тағы бергә ике дуҫ.
Ике дуҫтың ярашҡанын
Күҙәтә икән күпме күҙ?

Бына тағы, ҡармаҡ алып,
Китте улар балыҡҡа.
Дуҫлыҡтары ныҡлы булһын,
Юл ҡуймайыҡ талашҡа!

**Айнур ИҪӘНҒУЖИН.**
**Баймаҡ районының**
**Икенсе Этҡол ауылы.**

## Уҡытыусыма

Ер яралғандан бирле
Уҡытыусы – беренсе!
Сәнки ул – белем биреүсе,
Сәнки ул – тәрбиәсе.

Тоғро дуҫ та, серҙәш тә ул,
Тапҡыр кәңәш биреүсе,
Ауыр саҡта ярҙамсы ла,
Тура юл күрһәтеүсе.

Бөйөк эшеңде ололап,
Хаҡ баһаларың бирәм.
Уҡытыусым, һинең алда
Мин башымды эйәм.

**Фәриҙә ҒӘЙЕПҠОЛОВА.**
**Шишмә районының**
**Йәнғалыш урта мәктәбе**
**уҡыусыһы.**



Күренекле дәүләт эшмәкәре һәм яҙыусы Афзал Таһировтың тыуыуына – 120 йыл

# ЮРМЫЙ БАШҠОРТО



**Күренекле яҙыусы һәм дәүләт эшмәкәре Афзал Мөхәтдин улы Таһиров 1890 йылдың 25 октябрендә Һамар губернаһы, Бөгөлмә өйәҙе, Әлмәт волосының, башҡорттоң Юрмый ырыуына ҡараған Абдрахман ауылында (был боронғо башҡорт ерҙәре хәҙер Татарстанда ҡалған) тыуған.**

**Ул кесе йәштән етем ҡала, хеҙмәтсе булып йөрөй. Зирәк һәм хеҙмәт яратыусы малай Ҡаҙан, Ырымбур мәҙрәсәләрендә белем ала. Беренсе донъя һуғышында ҡатнаша, 1918 йылда уҡ большевиктар партияһына алына. Граждандар һуғышында командир һәм комиссар булып ҡатнашып, яу юлдарын 1922-25 йылдарҙа Үзбәкстанда баҫмасыларға ҡаршы көрәштә полк комиссары вазифаһында тамамлай. Шул ваҡытта уҡ "Революция ҡояшы" исемле гәзиттең мөхәррире лә була.**

1932-37 йылдарҙа Афзал Таһиров БАССР Үҙәк Башҡарма Комитеты рәйесе вазифаһын башҡара. Шул уҡ ваҡытта ул яңы ойошторолған Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе лә була. 1932 йылда Афзал Таһиров СССР Үҙәк башҡарма комитеты ағзаһы итеп һайлана һәм ғүмеренең аҙағына тиклем шул вазифала ҡала.

Афзал Таһиров йәш сағынан уҡ яҙыусылыҡ эшенә ылыға. Уның наҙанлыҡты һәм дини хөрәфәттәрҙе фашлаусы "Бисура" исемле комедияһы 1907 йылда уҡ донъя күрә. Совет осорондағы драмалары, повестары күпселектә яңы тормош ҡороу юлындағы ҡаршылыҡтарҙы һүрәтләүгә ҡорола. Ә "Һалдаттар", "Ҡыҙылгвардеецтар", "Ҡыҙылармеецтар" исемле романдар трилогияһы өс һуғыш юлдарында үҙенең күргәндәрен тасуирлай.

Афзал Таһиров СССР Яҙыусылар союзының беренсе съезында башҡорт әҙәбиәтенең үҫеш юлдары тураһында доклад менән сығыш яһай. Ул ғүмеренең ахырына тиклем Александр Фадеев менән хат алыша. Фадеев уны Горький менән таныштыра. 1932 йылда Өфөгә килгәндә Фадеев Афзал Таһировтың "Завод" тигән пьесаһын ҡарай һәм был турала Максим Горькийға хат яҙа.

"**Хөрмәтле Таһиров иптәш**, – тип яҙа Горький уға 1935 йылдың 20 сентябрендә. – **Мин революцияға тиклемге ауыл тормошо һәм колхоздарҙың йәшәйеше менән таныш булмағас, был турала аныҡ фекер әйтә алмайым. Ә пьеса үҙе миңә бик теремек һәм ҡыҙыҡлы күренде, ул завод һәм колллективтарҙа ҡуйырға баралыр. Бәлки уны ҙур театрҙар ҙа алыр ине, тик быны өсөн әҫәрҙе берәй рус яҙыусыһы менән ҡарап сығып, тел өҫтөндә эшләргә кәрәк буласаҡ. Уны "Октябрь" журналына бирергә кәңәш итәм, үҙәк баҫмала баҫылып, ул театр белгестәренең иғтибарына эләгер ине".**

Александр Фадеев, Афзал Таһировтың ижады өсөн борсолоп, ул ваҡытта Башҡортостан Өлкә Комитеты секретары булған Быкинға ошондай хат ебәрә: **"Мин һеҙҙән быйыл Афзал Таһировҡа совет работниктарына тейешленән күберәк ял биреүегеҙҙе һорар инем. Ошо ай ярым булһа ла ваҡытты ул ижади эш өсөн файҙалана алыр ине. Шундай ҙур тормош тәжрибәһе туплаған һәм, һис шикһеҙ, һәләтле яҙыусының йыл эсендә ижад итергә мөмкинлеге булмауы үтә йәл..."**

1937 йылда Афзал Таһиров Сталин системаһы тарафынан нахаҡҡа хөкөм ителә. Ул үҙ заманының билдәле яҙыусылары Мәжит Ғафури, Дауыт Юлтый, Имай Насыри, Ғариф Ғүмәр, Сәғит Агиштар менән бер рәттә тороплоҡ яҙыусы.

**Т. АМАНОВ.**

5 октябрь – Уҡытыусы көнө

# Бөйөк шағир рухы алға әйҙәй




**Иҫемдә**
**алтын**
**һуҡмаҡҡа**
**Тәү аяҡ баҫҡан көнөм.**
**Тәү башлап**
**мәктәп ишеген**
**Үрелеп асҡан көнөм.**

Был данлыҡлы шиғыр юлдарын Мостай олатайыбыҙ яҙған. Эйе, олатайыбыҙ, тибеҙ. Сөнки беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим исемен йөрөткән 158-се Башҡорт гимназияһының IV "А" синыфында белем алабыҙ.

Күптәрҙең хыялы булған был изге йортҡа көн һайын ашҡынып, дәртләнеп киләбеҙ. Сөнки бында төплө белем алыу, һәләттәреңде үҫтереү өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылған.

Синыфыбыҙ менән бар булған мөмкинлектәрҙе файҙаланырға тырышабыҙ. Уҡыуҙа ла, мәктәптән тыш сараларҙа ла һынатмайбыҙ. Былтыр гимназиябыҙҙа үткән башланғыс синыфтар аҙналығында, төрлө конкурстарҙа уңышлы ҡатнашып, үҙ тиҫтерҙәребеҙ араһында еңеүгә өлгәштек. Матур яҙыу, тиҙлеккә уҡыу, иң күп китапханаға йөрөүселәр, шиғыр һөйөүселәр, яҡшы уҡыусылар исемлегендә беҙҙекеләр алдынғылыҡты бирмәне.

Был уңыштарыбыҙ өсөн уҡытыусыбыҙ Рәғиҙә Хөсәм ҡыҙы Зәйнуллинаға рәхмәтлебеҙ. Һәр дәресен ҡыҙыҡлы, фәһемле итеп үткәреп, уҡыуға ҡыҙыҡһыныу уята ул. Башҡорт телендә дөрөҫ, матур итеп һөйләргә өйрәтеп кенә ҡалмай, тыуған илебеҙгә, телебеҙгә һөйөү тәрбиәләй. Тырышырға, уңышҡа өлгәшергә әйҙәй, ғәҙеллек, дуҫлыҡ төшөнсәһен аңлата.

Синыфыбыҙ менән сәнғәткә ғашиҡбыҙ. Ҡурай, ҡумыҙ, скрипка, баян һәм фортепьянола уйнаусылар, оҫта йырсы, бейеүселәребеҙ бар. Зәрилә Латип ҡыҙы Тәтегәсова ойошторған "Ләйсән" түңәрәгендә шөғөлләнеп, район күләмендә "Сулпан" фольклор конкурсында ике йыл рәттән икенсе урын яуланыҡ.

Район бәйгеләрендә уҡыу алдынғылары Алина Әхмәтова – шиғыр, Асия Сәлихова әкиәт һөйләп беренсе урын яулаһа, мин – бейеүем менән еңеүгә өлгәштек. Тик "бишле"гә генә уҡыусы Ильяс Хажиев киләсәктә үҙен актерлыҡ оҫталығында һынап ҡарамаҡсы. Заһир Ғайсин иһә фортепьянола оҫта уйнай, атаһы кеүек композитор булырға хыяллана. Элина Латипова, йырсы булам, ти. Кейеҙ баҫыу түңәрәгендә Регина Ғарипова, Снежана Сәйетгәрәева, Элина Үтәгәнова менән бер рәттән малайҙар ҙа ихлас шөғөлләнә. Илфир Исҡужин, Камил Латипов баҫҡан кескәй биймалар, биҙәкле келәмдәр күҙҙең яуын алырлыҡ.

Спортта үҙ иткәндәр ҙә етерлек. Анастасия Нагорная – теннис, Шамил Мостафин каратэ буйынса район ярыштарында беренсе урын яулап, диплом, миҙалдар менән бүләкләнде.

Киләсәктә лә бөйөк шағир рухына тап төшөрмәй, белем тауының үрҙәренә яңынан-яңы уңыштар менән күтәрелербеҙ, илебеҙгә лайыҡлы ул һәм ҡыҙҙар булып үҫербеҙ. Мин быға ышанам!

**Диана БАЙКОВА,**
**Өфө ҡалаһының Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы уҡыусыһы.**

**ҺҮРӘТТӘ: IV "А" синыфы уҡыусылары етәкселәре Рәғиҙә Хөсәм ҡыҙы Зәйнуллина менән.**

5 октябрь – Уҡытыусы көнө

# *Рәхмәт һеҙгә, остаздарым!*

Быйылғы уҡыу йылында мин ун беренсе синыфтамын. Мәктәптәге һуңғы йылым. Тыуған мәктәбемде, мөләйем йөҙлө яратҡан уҡытыусыларымды ҡалдырыуҙың бик ауыр буласағын беләм. Ирекһеҙҙән тәү тапҡыр беренсе синыфҡа барған көнөм иҫемә төшә... Бына мин, кескәй ҡыҙыҡай, бер ҡулым менән атайымдың ҙур усына һыйынып, икенсеһе менән ошо зиннәтле һарайға оҡшаш мәктәп бинаһының ишеген асырға тырышам... Көсөм етмәй... Ошо ваҡыт йөҙөнән нур бөркөлгән бер апай күренде. Ишекте еңел генә асып, миңә йомшаҡ ҡулдарын һуҙҙы һәм күҙҙәремә ҡараны. Был минең тәүге уҡытыусым Минира Сабирйән ҡыҙы Искәндәрова ине. Башланғыс синыфта уҡып бөткәнсе ул миңә ышанyслы терәк булды, тормошта дөрөҫ юлды һайларға өйрәтте.




Уйҙарымдан ысынбарлыҡҡа ҡайтам. Ишекте асам һәм... оҙон коридор аша үтеү менән, алдыма икенсе ҡатҡа күтәрелер өсөн һикәлтәле баҫҡыс пәйҙә була. Ҡапыл кемдер ҡулын яурыныма һалғанын һиҙәм. Артыма әйләнеп ҡараһам, синыф етәксем Әминә Риф ҡыҙы Мөләкова икән. Үткәндәрҙе, беренсе тапҡыр уның синыфына килеүемде иҫкә төшөрәбеҙ. Әминә апай бишенсе синыфта үҙ ҡанаты аҫтына алып, белем тауҙарына үрләргә ярҙам итте, оло маяҡ кеүек алға юл күрһәтеп торҙо. Әлеге ваҡытта, тормош юлының иң тәүге, мөһим баҫҡысына аяҡ баҫҡанда уның һәр бер һүҙе миңә изге аманат.

Математика кабинеты алдында туҡталып ҡалам. Ҡарашым уҡытыусы өҫтәле артында ҡағыҙға нимәләр яҙып ултырған Зилә Зиләүер ҡыҙына төштө. Тағы ла кескәй сағым күҙ алдыма килә: бер ваҡыт математика дәресенә һуңға ҡалдым. Ҡурҡа-ҡурҡа ғына синыфҡа индем, иҫәнләштем. Хәҙер шелтә эләгер, тип ҡурҡып торғанымда ғына, Зилә Зиләүер ҡыҙы үҙ урыныма ултырырға ҡушты, теманы аңлатыуын дауам итте. Дәрестән һуң уҡытыусым саҡырып алды. “Мәктәптә генә уҡыһаң да, һин әле үк яуаплылыҡтың нимә икәнен белергә тейешһең. Ғүмерлеккә иҫеңдә ҡалдыр: кемдер һиңә ышанып тормошон, ғүмерен бағышлар, һин улар өсөн яуаплы булыуыңды онотма! Тормош – ул шахмат фигураларының йөрөшө кеүек, алдағы көндәге хәрәкәттәрең алдан уйланырға тейеш. Тик шунда ғына һин еңәсәкһең һәм бәхетеңдең хужаһы буласаҡһың!” – тине.




Уҡытыусым Рим Риф улы Исхаҡовты ла мәңге онотмам. Ниндәй генә фәндән уҡытмаһын, һәр дәресе ҡыҙыҡлы, фәһемле булды. Драма түңәрәгенең етәксеһе булараҡ та оло эш башҡара ул. Һәр уҡыусыға дуҫтарса өндәшер, төрлө кәңәштәр бирер, кәрәк урында әҙерәк шелтәләп тә алыр. Был түңәрәктә тәүге башҡарған образым да иҫтә: “Һыу башлатыу” спектаклендә малай (!) роле. Ниндәй ҙур яуаплылыҡты ышанып тапшырған булған миңә Рим Риф улы! Уҡытыусыма мең-мең рәхмәтлемен, сөнки ул миндә актер һәм журналист һөнәрҙәренә мәңгелек һөйөү уятты.

...Мәктәп коридорҙарын ҡалдырып, урамға сығам. Күктә ҡояш йылмая, сәстәрем менән наҙлы ел уйнай. Бигерәк матур, аяҙ көн. Алдымда мөһабәт, ғорур булып, бар тирә-яҡҡа нур сәсеп мәктәбем ултыра. Ун йылдан артыҡ ғүмерем ошо урын менән бәйле. Күҙҙәремә йәштәр тығыла. Оҙаҡламай ул миңә ҙур тормош юлына фатихаһын бирәсәк. Белем тауының үрҙәренә артылырға ҡанат үҫтерешкәндәрә өсөн барлыҡ уҡытыусыларым алдында баш эйәмен. Рәхмәт һеҙгә, остаздарым!


**Фаягөл ИСХАҠОВА,**
**“Аманат”тың йәш хәбәрсеһе,**
**Ҡырмыҫҡалы районының**
**Бишауыл-Уңғар урта мәктәбе уҡыусыһы.**

# БЫНДА ЫРЫМБУРҘАР ҘА БЕЛЕМ АЛА

**“Аманат” журналы үҙенең уҡыусылары араһында төрлө ҡыҙыҡлы конкурстарҙы өҙлөкһөҙ үткәреп тора. Яңыраҡ ҡына, мәҫәлән, “Аманат” ваҡыты менән йәшәгеҙ!” бәйгеһе тамамланды. Өлөшсәләренән тулы сәғәт һүрәтен йыйып, иң беренсе булып беҙгә Күмертау ҡалаһынан Илүзә Харрасова ебәрҙе. Бүләкте эйәһенә тапшырып килеүҙе оҙаҡҡа һуҙманыҡ, алтын көҙҙөң иҫ киткес йәмле бер көнөндә Күмертау тарафтарына юлландыҡ. Бер юлы Илүзә белем алған 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернаты менән дә яҡындан танышырбыҙ, тип уйланыҡ.**



…Уҡыусылар менән осрашыу бик йәнле барҙы. Һорауҙарҙы кемуҙарҙан, эй, яуҙырҙылар ғына, яуап биреп кенә өлгөр! Журналды беләләр, уҡыйҙар, алдыралар, тимәк. Беҙгә, балалар матбуғатында тир түгеүселәргә, ошонан да ҙур бүләк юҡтыр. Еңеүсебеҙ Илүзә Харрасова 5-се “Б” синыфында тик “бишле” билдәләренә генә өлгәшә, журналды 9 йәшенән алдырып уҡып бара. Бигерәк тә әкиәттәр, спорт битендә бирелгән мәҡәләләрҙе уҡырға ярата, “Ай, һылыу!” конкурсын да даими күҙәтеп бара. Киләһе йылда конкурс дауам ителә ҡалһа, үҙенең дә ҡатнашып ҡарарға иҫәбе юҡ түгел.




“Аманат” ваҡыты менән йәшәгеҙ!” бәйгеһендә еңгәнемде ишеткәс, шатлығымдан хатта илап ебәрҙем, сөнки ундай конкурстарҙа бер ҙә еңеү яулағаным юҡ ине әле”, – тине Илүзә.

3-сө Башҡорт республика гимназия-интернаты республикалағы иң өлкән белем усаҡтарынан һанала. Ул 1959 йылда асыла. 1962 йылда уға космонавт Юрий Гагарин исеме бирелә.

Башҡортостан Республикаһының Халыҡ мәғарифы министрлығы коллегияһы ҡарары менән 1993 йылдың 22 июлендә 2-се Күмертау мәктәп-интернаты мәктәп-гимназия-интернат тип үҙгәртелә. 1996 йылда, республиканың көньяҡ райондары һәм Ырымбур өлкәһенән ҡабул ителгән балаларға белем биреүҙе маҡсат итеп, Республика башҡорт гимназия-интернаты тип үҙгәртелә. Әлеге ваҡытта 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернаты тип йөрөтөлә.

2007 йылда гимназия тулыһынса реконструкцияланып, төкәтмә итеп спорт залы, ашхана төҙөлә. 2008 йылда “Мәғариф” өҫтөнлөклө милли проект сиктәрендә уҙғарылған конкурста ҡатнашып, грантҡа – миллион һумға лайыҡ була. Бөгөн был белем усағын БР-ҙың мәғариф алдынғыһы Фәһим Фәрғәт улы Боҫҡанов етәкләй.

Бөтәһе 559 уҡыусы белем ала. Шуларҙың 300-гә яҡыны – Күмертау ҡалаһынан. 32 бала килешеү нигеҙендә күрше Ырымбур өлкәһенән ҡабул ителгән. Уҡыусылар математика, рус һәм башҡорт телдәренән имтихан тапшырып, һуңынан әңгәмә үтеп, гимназияға алына. Бында йүнәлешле уҡытыу тормошҡа ашырыла, уҡыусылар социаль-гуманитар, химия-биология һәм физика-математика синыфтарына бүленеп уҡыйҙар. Ситтән килгәндәр өсөн бына тигән интернат бар, унда йәшәү өсөн бөтә шарттар ҙа булдырылған, иркен, матур бүлмәләрҙә ике-өс кеше йәшәй. Туҡланыуға ла һүҙ тейҙерерлек түгел, көнөнә биш тапҡыр ашаталар. Ҡыҫҡаһы, бар зиһенеңде тик аң-белем алыуға йүнәлт, һәләттәреңде үҫтерергә ынтыл ғына! Шуға күрә йылдың-йылы

сығарылыш синыфы уҡыусыларының юғары уҡыу йортона инеү күрһәткестәренең яҡшы булыуы бер ҙә ғәжәп түгелдер. Былтыр гимназияны миҙалға алты уҡыусы тамамлаһа, быйыл уларҙың һаны унауға еткән.

Гимназия Башҡортостан мәғарифын үҫтереү институты менән дә тығыҙ бәйләнеш булдырған. Бында педагогия фәндәре кандидаты Флорида Рәшит ҡыҙы Фәхретдинова етәкселегендә “Белем биреү процесында заманса педагогик технологияларҙы ҡулланыу шарттарында уҡыусыларҙы ижади шәхес булараҡ үҫтереү” тәжрибә майҙансығы уңышлы эшләй.

Уҡытыусылар ҙа, уҡыусылар ҙа фәнни-тикшеренеү эштәре менән ихлас шөғөлләнә, төрлө ғилми конференцияларҙа ҡатнашып, еңеү яулай. Мәҫәлән, былтыр “Фәнгә тәүге аҙымдар” бөтә Рәсәй конкурсында VIII “Б” синыфынан Альмир Вәлитов менән XI “А”-нан Луиза Бикмәева III дәрәжә дипломға лайыҡ булған.

– Уҡытыу барышында яңы мәғлүмәт технологияларын ҡулланыуға ҙур иғтибар бирелә. Уҡыусылар ҙа, педагогтар ҙа интернет ҡулланып, үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған мәғлүмәтте таба ала. Былтыр мәғлүмәт технологияларын һәм интернет-ресурстарҙы файҙаланып, 37 асыҡ дәрес күрһәтелде, – тип һөйләй директор Фәһим Фәрғәт улы.

Шулай уҡ бында түңәрәктәр, секциялар эшенә лә гөрләп тора. Әлбиттә, түңәрәктәрҙә күберәген 5-8-се синыф уҡыусылары шөғөлләнә. Өлкән синыфтар иһә берҙәм дәүләт имтиханы тапшырғас, дәрес бөткәс, төрлө фәндәр буйынса махсус курстарға ашыға. Иң һөйөнөслөһө – “Ынйылар” фольклор, “Сөмбөл” вокал, “Аҡсарлаҡ” өлгөлө бейеү ансамблдәре, “Сыңрау торна” ҡурайсылар түңәрәге ағзалары ҡала күләмендә генә түгел, ә республика конкурстарында ҡатнашып, призлы урын яулап, гимназияның данын арттыра.

– Мәҫәлән, VIII ”Б” синыфы уҡыусыһы Илнур Рамаҙанов – гимназияның йөҙөк ҡашы. Ниндәй генә конкурстарҙа диплом, гран-при яуламаны ул! Былтыр, мәҫәлән, “Яҙғы тамсылар” һәм Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге республика йыр фестиваль-конкурстарында беренсе дәрәжә дипломға лайыҡ булды.

– Бейеүсе ҡыҙыбыҙ Нургөл Дәүләтшина “Яңғырауыҡ үксә” республика конкурсында ҡатнашып, дипломант исемен яуланы.

Әскәт Шәрипов алып барған милли көрәш секцияһында ла малайҙар бик теләп шөғөлләнә. Йәш батырҙарыбыҙ ҡала, республика кимәлендә үткән ярыштарҙа ҡатнаша. Мәҫәлән, Эмиль Әбдрәшитов, Динислам Абдуллин, Динис Шәриповҡа киләсәктә өмөттәр бағлайбыҙ. “Аҡ ладья” шахмат-шашка түңәрәген үҙ итеүселәр ҙә етерлек. Киләсәктә был өлкәлә лә еңеүҙәргә өлгәшербеҙ әле, моғайын. Азалия Юлдыбаеваның шашка буйынса Ишембай ҡалаһында үткән XIII спартакиадала беренсе урынға лайыҡ булыуы һәр хәлдә ошоға ишара, – ти директорҙың тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары Рәмилә Ишкинина.

Гимназияның тәрбиәүи эшендә Башҡортостан мәҙәниәте уҡытыусыһы Әлфиә Рәжәпова етәкләгән пресс-үҙәк тә мөһим урын алып тора. Был үҙәк ағзалары “Саткылар” исемле мәктәп гәзитен сығара, гимназия тормошо сағылдырылған ҡыҫҡа мәҡәләләр шулай уҡ “Юшатыр” район гәзитендә лә донъя күреп тора.



Йыл буйына алып барылған ҙур тәрбиәүи эштең һөҙөмтәләре йыл аҙағында традицион рәүештә үткәрелгән һабантуйҙа билдәләнә, уҡыусыларға Маҡтау ҡағыҙҙары һәм бүләктәр тапшырыла.

Һәр уҡыусыны шәхес булараҡ республикабыҙҙың лайыҡлы кешеһе итеп тәрбиәләүҙе төп маҡсат иткән был гимназия киләсәктә лә яңы уңыштарға өлгәшһен.

**Нурия ФАЗЛЫЕВА.**

РЕСПУБЛИКА ЙЫЛЫ 1990 2010 ГОД РЕСПУБЛИКИ

# Бәпәнә Япан улы нәҫеленән беҙ...

Башҡорт халҡының яҙылмаған ҡанунына ярашлы үҙ ғүмерендә һәр кем ағас ултыртырға, йорт һалырға, бала үҫтерергә һәм үҙенең ете быуынын өйрәнергә тейеш. Мин әсәйем ярҙамы менән шәжәрәбеҙҙең ете быуынына тиклем өйрәндем. Әсәйем – Бәпәнина Мәрйәм Мөғәллим ҡыҙы 1958 йылда Учалы районының Ташҡыя ауылында тыуған.

Элек башҡорттар – ҡәбиләләргә, ә ҡәбилә ырыуға бүленгән. Беҙ, Тиләү ырыуы, Барын-Табынға ҡарайбыҙ. Бәпәниндар быуыны тарихы ун һигеҙенсе быуат урталарына барып тоташа.

Теге йәки был ғаиләләрҙең тарихы, һис шикһеҙ, ауыл тарихы менән бәйле. Ошо урында ауыл тарихын күҙ алдына килтереү кәрәк. Ташҡыя ауылы тигән һүҙбәйләнеш Совет осоронда ғына барлыҡҡа килгән. Тәүҙә уны Мишкә утары тип йөрөтәләр. 1920 йылдарҙа ғына Ташҡыя тигән исем өҫтәнлек ала.

Ни өсөн Мишкә булған? Сөнки Верхнеуралдан (Силәбе өлкәһенә ҡараған ҡала) Михаил тигән урыҫ байы, урындағы халыҡ менән килешеп, балыҡ тотоу, ғаиләһе менән ял итеү өсөн йорт һалған булған. Ләкин ул был урында йәшәмәгән, шуның өсөн йортон ҡарап торорға берәүҙе яллаған, яйлап был урынға башҡалар ҙа килеп урынлашҡандар.

Бәпәниндар быуынының иң боронғо вәкилдәренең береһе – Ҡуҙмәмбәт – Мәҫкәүбай Мәмбәтколов заманында йәшәгән. Мәҫкәүбай 1735-1740 йылдарҙағы яуҙа ҡатнашҡан, уның исеме тарихи сығанаҡтарҙа йыш иҫкә алына. Был осорҙа Тиләү ырыуы старшинаһы Йәммәт Бикәй улы ла ғүмер иткән. Ул үҙ ырыуы кешеләрен мөмкин тиклем баш күтәреүҙәрҙән йолоп алырға тырышҡан. Ҡуҙмәмбәттең улы Япан баш күтәреү осоронда бала ғына булған. Япандың улы Бәпәнә үҙ заманы өсөн абруйлы ғына кеше булған. Ул зауряд-хорунжий исемен йөрөтә. Балалары ла күп була. Өсөнсө улы Солтантимерҙән Әхмәтъязар тыуа.

Әхмәтъязарҙың балалары Бәпәниндар сылбырын башлап ебәрә лә инде. Әхмәтъязар донъя көтөүгә сослоғо менән айырылып торған. XIX быуат аҙағы – XX быуат баштарында ул тирә-яҡҡа билдәле байға әйләнә. Кәрәкле техника иң тәүҙә уның хужалығында була. 1930 йылда алтмыш йәшлек Әхмәтъязарҙы кулак тип Себергә ебәрергә, мал-мөлкәтен тартып алырға тейеш булалар. Ҡарт булғас, уның урынына улын – минең олатайым Мөғәллимде – ебәрәләр. Аҙаҡ “Аталары өсөн балалары яуап бирмәй” тигән закон сыҡҡас ҡына, олатайымды ҡайтаралар. Ул бик күп ыҙалыҡтар менән ҡайтып етә.

Олатайым ауылдың бик абруйлы кешеһе, һуғыш ветераны, һуғыштан һуң бригадир була. Ғүмере буйына умартасылыҡ менән шөғөлләнә. 1984 йылда вафат була. Уның ҡыҙы – Мәрйәм. Мәрйәмдең улы мин, Нияз.




**Нияз ФӘЙЗУЛЛИН,**
**Учалы ҡалаһының**
**10-сы урта мәктәбе уҡыусыһы.**

Конкурс




# РӘХМӘТУЛЛА АУЫЛЫ

**Әбйәлил районының Рәхмәт ауылына 1756 йылда йөҙбашы Рәхмәтулла нигеҙ һала. Ауылды төньяғынан – Ҡалаҡтау, көнбайыштан – Ҡаҙғанбил, Йөрәктау елдәрҙән һаҡлай. Сылтырап аҡҡан һыуһар шишмәһе эсәр һыу сығанағы була. Тәүҙә ауылды йорт старшинаһы Рәхмәтулла хөрмәтенә Рәхмәт йорто тип йөрөткәндәр. Ә инде XVIII быуат аҙағында ауыл Рәхмәт тип атала башлай.**



Ауыл ҙурая, төҙөкләнә бара. 1858 йылда иһә Рәхмәт ауылы 6-сы башҡорт кантонының үҙәгенә әүерелә. Ул йылдарҙа кантон начальнигы булып Сибай ауылы кешеһе Шәйәхмәт Утәрбай улы Сибаев эшләй. Сит яҡтан килгән кеше үҙенең тыуған яғын, һөйгәнен йыш иҫкә ала. Шулай итеп, Кубәләк ерендә башҡорт халыҡ йыры "Сибай" тыуа.

*Йәшел генә сана, зыңғыр дуға*
*Ектерһәнә, Фатимам, туратҡа.*
*Атайсалға ҡайтып кантон булһам,*
*Ирешер инем, Фатимам, моратҡа.*

Ҡыҙғаныска ҡаршы, кантон начальнигына моратына ирешергә насип булмай. 1864 йылдың аҙағында Шәйәхмәтте Верхнеуральск ҡалаһына атаманлыҡҡа алалар. Ошо ҡалала ул ауырып үлеп ҡала.

1864 йылдың ғинуарында Рәхмәт ауылында тәүге башҡорт-рус мәктәбе асыла. Мәктәп асыу, тәрбиә биреү башҡорт халҡының данлыҡлы шәхестәренең Рәхмәт тупрағында үҫеүенең дә сәбәбе булып торалыр. Бөтәбеҙ ҙә яратып тыңлаған башҡорт халыҡ йыры "Ғүмәров"тың килеп сығыуы шуны дәлилләй.

Ауылым үҙенең улдары һәм ҡыҙҙары менән хаҡлы рәүештә ғорурлана ала. Филология фәндәре докторы, профессор, Рәсәй фәндәр академияһының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры Фирҙәүес Хисаметдинова һәм филология фәндәре кандидаты, Башҡорт дәүләт педагогия университеты доценты Рәшиҙә Хисаметдиновалар менән беҙ ғорурланабыҙ, улар – ауылым шәхестәре.

Хәҙерге ваҡытта Рәхмәт ауылы үҫә, күркәмләнә. Балалар ике ҡатлы, матур, ҙур мәктәптә белем ала. Мәктәптә Сибай кантон иҫтәлегенә ҡуйылған таҡтаташ тора. Төньяҡ Осетия һуғышында батырҙарса башын һалған Шаһимәрҙәнов Венер исеме мәңгеләштерелгән. Уҡыу усағында музей эшләй. Унда ауылым шәхестәре, комартҡылар урын алған.

Киләсәктә ауылым тағы ла үҫер, матурланыр тигән өмөттәмен. Беҙ, ауылым киләсәге, ауылыбыҙҙың данын тирә-яҡҡа таратырбыҙ, уның намыҫына тап төшөрмәҫбеҙ!

**Гөлназ АЛТЫНБАЕВА.**
**Әбйәлил районының**
**Рәхмәт ауылы.**
**Мәҡәләне әҙерләгәндә Илдар Исламовтың "Әбйәлил күбәләктәре" китабы файҙаланылды.**

Зәлифә КАШАПОВА

# Баш бүре



1
Өй түрендәге келәмдә –
Аҡ һаҡаллы өлкән бабам.
Уның көйләп һөйләгәнен
Иғтибарлап тыңлап барам.
Тәсбих тартып, әкрен генә
Һүҙ башлай ул, тыңла, тиеп.
Риүәйәтем ни хаҡында,
Һин, балаҡай, аңла, тиеп.
Бөгөн генә уйланмаған,
Боронғолар әйткән һүҙ был.
Йыраҡ тарих төпкөлөнән
Ата-бабаң баҡҡан күҙ был…

2
Борон заман бер далала
Ап-аҡ инә бүре булған.
Оҙаҡ йәшәп көн иткәнгә,
Өйөрөнән дала тулған.
Балалары уны ҙурлап,
Баш бүре тип өндәшкәндәр.
Үҙ иркендә уйнап, үҫеп,
Бер-береһенә
тиңләшкәндәр.
Хәүеф-хәтәр янағанда
Тупланғандар бер өйөргә.
Баш бүренең ышығында
Рәхәт кенә көн күрергә.
Төрки телдә әйткән саҡта,
Баш бүре ул –
“Баш ҡорт” икән.
“Ҡорт” тигәне – иҫеңдә тот:
Бүре мәғәнәһен биргән.
Баш бүренең өйөрөндә
Буйһонғандар бары уға.
Ул күрһәткән эҙҙән барһаң,
Бер хәсрәтһеҙ ғүмер аға…
Был ҡарт инә дала иңләп,
Аҡыл туплап, йәшәй биргән.
Кешеләрҙе яҡын күреп,
Кәңәштәрен әйтеп килгән.
Баш бүре шул, һиңә әйтәм,
Бик тә етеҙ, зирәк икән.
Уның зирәклеген данлап,
Тирә-яҡҡа хәбәр киткән.
Бөгөн генә уйланмаған,
Боронғолар әйткән һүҙ был.
Йыраҡ тарих төпкөлөнән
Ата-бабаң баҡҡан күҙ был.

Кереш һүҙҙең ахырына
Етеп килә инде бабаң.
Шул урында туҡтап, балам,
Аҙға ғына мин тын алам…

3
Яҡын йәйләүҙә бер ырыу
Кешеләре тормош ҡорған.
Нәҫел-нәсәбен ишәйтеп,
Бала-саға тыуып торған.
Аҙмы-күпме шулай йәшәп,
Көн артынан көндәр үткән.
Күк батшаһы – яҡты Ҡояш

Ерҙе наҙлап, нурын һипкән...
Бер йәй кинәт, һиңә әйтәм,
Бәлә килгән был ырыуға.
Мал-тыуарҙар күпләп-күпләп
Дусар булған ҡырылыуға.
Тирә-яҡта һыуҙар кибеп,
Үләндәр бик һарғайған, ти.
Дауыл болоттары сығып,
Күк көмбәҙе ҡарайған, ти.
Ырыу халҡы был ғәмәлгә
Ныҡ аптырап ҡайғырған, ти.
Баш Тәңрегә башын ороп,
“Яҡла!” тиеп табынған, ти...
Баш бүре, афәтте күреп,
Белеп кенә тора икән.
Ул йәйләүгә тиҙ арала
Ярҙамға тип, килеп еткән.
Инә бүре ҡабаланып
Кешеләргә күҙ йүгерткән.
Ҡыйыулығын эшкә егеп,
Телгә килеп, әйткән икән:
– Ҡайғырмағыҙ,
ҡәрҙәштәрем,
Мин эйәртеп алам һеҙҙе.
Өйөр туплап, алдан барһам,
Ауырлыҡтар еңмәҫ беҙҙе!
Иҫ китмәле урын беләм –
Урал тауы күккә тейгән.
Йүгерҙәнкәй, бормаланып,
Һылыу башын ергә эйгән.
Һәм кешеләр, күндәм тыңлап,
Эйәргәндәр Баш бүрегә.
Бик теләгән икән улар
Ожмахҡа тиң ер күрергә.
Бөгөн генә уйланмаған,
Боронғолар әйткән һүҙ был.
Йыраҡ тарих төпкөлөнән
Ата-бабаң баҡҡан күҙ был.

4

Бер сылбырға теҙелешеп,
Йыраҡ ара килгән улар.
Ете диңгеҙ арьяғында
Ят ерҙәрҙе күргән улар.
Ете үҙән аша сығып,
Бер аҙ ял итеп алғандар.
Йүгерҙән дә юлды киҫкәс,
Арып-талып, туҡталғандар.
Киске эңер, ҡанат йәйеп,
Ҡалҡыулыҡтар аша үткән.
Сал Уралдың күкһел башын
Тулған ай ҙа ятып үпкән.
Ниһайәт, Баш бүре, олоп,
Менеп баҫа үр башына.
Ошо – ғәзиз еребеҙ, тип,
Тамға һала тау-ташына.
Тирә-яҡта – ҡуйы урман,
Урманында мышы, болан.
Йылғаһында, һиңә әйтәм,
Ҡыҙылғанат, сабаҡ тулған.
Сәскә һайлап туғайҙарҙа
Безелдәй, ти, бал ҡорттары.
Елдән етеҙ көтөү булып,
Сабыша, ти, буҙ аттары.
Гөл-сәскәле болондарҙа
Ҡанат елпей күбәләктәр.
Зәңгәр күҙле күлдәре лә
Бигерәк матур, түңәрәктәр...
Ҡарап туймаҫ тәбиғәтле,
Күҙ ҡамашыр урман, күл был.
Бөгөн генә табылмаған,
Ата-бабаң күргән ер был.

Инде ҡай тарафҡа еттек,
Зинһен һалып тыңла, балам!
Шул ерҙәрҙең байлығына
Һоҡланып та тора бабаң.

5

Бына шулай Йәннәткә тиң
Ерҙе төйәк иткән улар.
Баш бүренең исеменән
Башҡорт булып киткән улар.
Ете шишмә бәреп сыҡҡан
Тап баш бүре баҫҡан ерҙән.
Ете яғынан донъяның
Уны маҡтап, ҡоштар килгән.



Бер ырыуҙың тамырҙары
Ете яҡҡа таралғандар.
Улары ҙур тирмә ҡороп,
Ете яҡтан ер алғандар...
Мал үрсетеп, ер эшкәртеп,
Көн күргән, ти,
башҡорт халҡы.
Барыһынан ҡиммәт булған
Ҡан-ҡәрҙәшлек,
дуҫлыҡ хаҡы.
Оран һалып, яуға сыҡҡан,
Әгәр һуғыш килһә илгә.
Хөрмәт менән ҡараған ул
Ата-әсә, тыуған ергә.
Күп ырыулы булып йәшәй
Әле лә был эшсән халыҡ.
Нәҫел-һаны, һиңә әйтәм,
Әйтерһең дә, күлдә балыҡ.
Бөгөн генә уйланмаған,
Боронғолар әйткән һүҙ был.
Йыраҡ тарих төпкөлөнән
Ата-бабаң баҡҡан күҙ был.

6

Хозур ерҙе иңләп йәшәй
Баш бүренең заттары.
Күңеленә уйып ҡалдыр
Башҡорт исем-аттары.
Риүәйәттең төп асылын
Сабый күңеленә һалам.
Ахыр килеп һиңә, балам,
Әйтер һүҙем инде тамам.
Тарихыңды өйрән, тиеп,
Ҙур теләктә ҡала бабаң.
Киләсәктә ул-ҡыҙыңа
Һин һөйләрһең шуны, балам!

– Эйе, бабам, аңланым мин:
Баш бүре булғанға инәм,
Ирек һөйгән халыҡ улы –
Башҡорт улы булып
ҡалам!

**Илеш районы,**
**Иштирәк ауылы.**

Күренекле дәүләт эшмәкәре һәм ғалим Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың тыуыуына – 120 йыл

# БАШҠОРТ ҒӘСКӘРЕ БАШЛЫҒЫ



1917 йылдың Февраль революцияһы һөҙөмтәһендә батша власы ҡолатылғас, башҡорттар араһында үҙаллылыҡ өсөн милли хәрәкәт ҡуҙғала. 1917 йылдың майында Мәскәүҙә үткән мосолмандар съезында 50 башҡорт делегаты ҡатнаша. Ошо съезда башҡорттар үҙҙәренең милли хәрәкәтенең етәкселек органы – Башҡорт өлкә шураһын (советын) ойоштороорға ҡарар итә. Шураға ағза итеп Сәғит Мерәсов, Аллабирҙе Йәғәфәров һәм Зәки Вәлиди һайлана. Башҡорт өлкә шураһы 1917 йылдың июлендә Ырымбур ҡалаһында Беренсе Башҡорт ҡоролтайын үткәрә.

1917 йылдың август айында Өфө ҡалаһында Икенсе Башҡорт ҡоролтайы уҙғарыла. Бында Зәки Вәлиди Башҡорт үҙәк шураһы рәйесе Шәриф Манатовтың урынбаҫары итеп һайлана. Бер үк ваҡытта ул үҙәк шураның эске эштәр бүлегеН етәкләй.

Артабанғы айҙарҙа Зәки Вәлиди башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтененең ысын мәғәнәһендә лидерына әүерелә. Ул Башҡорт үҙәк шураһының мөһим, тарихи документтарын әҙерләй. 1917 йылдың 15 ноябрендә үҙенең көрәштәштәре менән Башҡортостан автономияһын иғлан итеү тураһында 2-се һанлы фарман сығара.

Декабрь айында үткән Өсөнсө Башҡорт ҡоролтайына Башҡортостан автономияһын раҫлау буйынса бөтөн документтар, ҡарарҙарын әҙерләй, Башҡортостан автономияһының тәүге карталарын үҙ ҡулы менән эшләй. 3-сө ҡоролтайҙа Зәки Вәлиди Башҡорт хөкүмәтенең хәрби министры итеп һайлана. Делегаттар Зәки Вәлидигә оло хөрмәт йөҙөнән бүләктәр тапшыра. **“Миңә Туҡ-Соран кантоны (хәҙерге Ырымбур өлкәһендә) башҡорттары ҡоролтай исеменән бороңғо эйәр менән бәйге аты һиҙиә (бүләк) итте. Өҫтәүенә, алтын-көмөш менән биҙәлгән, ғәрәп хәрефтәре менән яҙыуҙар яҙылған көмөш сәй таҡымы, алтын ялатып яҙылған ҡул янсығы бүләк ителде. Батмусының төбөнә гүзәл шиғырҙар яҙылған был бүләктәрҙең миңә белгертмәй, алдан әҙерләнгәнлеге аңлашылды. Улар минең ғүмерем эсендә милләтем исеменән бирелгән иң самими (ҡәҙерле) бүләктәр булды”**, – тип яҙа Вәлиди үҙенең хәтирәләрендә.

Башҡорт милли хәрәкәте етәксеһе хәрби министр булараҡ ғәскәр эштәре менән шөғөлләнә. 1918 йылдың йәйендә уның етәкселегендә алты башҡорт уҡсы полкы, ике башҡорт кавалерия полкы һәм кантондарҙағы 13





мияһы тураһында килешеү төҙөлә. Ошо килешеүгә ярашлы 1917 йылдың ноябрендә барлыҡҡа килгән Башҡортостан автономияһы Автономиялы Башҡорт Совет Республикаһы тип иғлан ителә.

Башҡорт хөкүмәте үҙенең вәкәләттәрен Башҡорт Республикаһының яңы хөкүмәтенә – Башҡорт хәрби-революцион комитетына (Башревком) тапшыра. Зәки Вәлиди Башҡортостандың хәрби эштәр буйынса халыҡ комиссары итеп һайлана.



башҡорт отрядынан торған тотош бер милли армия үҫеп сыға. Вәлиди хәтирәләрендә былай тип яҙа: **“Мин әле булһа ла буйҙаҡ. Ғәскәр эше тотошлайға биләгән. Каруанһарайҙа ятып-тороп йөрөйөм. Миңә ул саҡ ғүмеремдең бөтә ҡалған өлөшө хәрби хеҙмәттә үтер төҫлө ине. Һалдаттар мине ныҡ яратты. Һаҡсылар төркөмөн таныш башҡорт ғаиләләренең һәм дуҫтарҙың балалары тәшкил итте”.**

Ошо ғәскәргә таянып, милли хәрәкәт етәксеһе Зәки Вәлиди ауыр осорҙарҙа ла Башҡортостан автономияһын һаҡлап ҡалыуға өлгәшә. Күпме генә тырышһалар ҙа, аҡ генералдар ҙа, адмирал Колчактың үҙе лә башҡорт ғәскәрен, Башҡорт автономияһын юҡҡа сығара алмай. Аҡтар яғында автономия алыуға өмөтөн өҙгәс, Башҡорт хөкүмәте большевиктар менән һөйләшеп, 1919 йылдың февралендә Совет власы яғына сыға. Зәки Вәлиди Мәскәүгә барып, Совет хөкүмәте етәкселәре В. И. Ленин һәм И. В. Сталин менән күрешеп һөйләшә. Ошоноң һөҙөмтәһендә, 1919 йылдың 20 мартында Мәскәүҙә Башҡорт хөкүмәте менән Үҙәк Совет хөкүмәте араһында Башҡортостан автоно-

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**“Башҡорт энциклопедияһы”**
**ғилми нәшриәтенең тарих бүлеге мөдире.**

**ҺҮРӘТТӘРҘӘ:**

**1. Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте етәксеһе, башҡорт ғәскәре башлығы Әхмәтзәки Вәлиди.**

**2. Зәки Вәлиди эшләгән Башҡортостан автономияһы картаһы.**

**3. Башҡорт ғәскәре командирҙары.**

**4. Башҡорт ғәскәре Петроградта парадта.**

# ТӘМЛЕ НӘМӘ, ҒӘҘӘТТӘ, ФАЙҘАЛЫ БУЛМАЙ




**Мәктәп уҡыусылары төрлө газлы эсемлектәрҙе яратып эсә, һағыҙ сәйнәргә ярата, ҡытырлап торған чипсылар ҙа уларҙың көндәлек аҙығына әйләнеп бара. Балалар шул тиклем дә яратып ашаған аҙыҡ-түлектең составы хаҡында уйланғанығыҙ бармы? Аҙыҡтың билдәле етештереүсе тарафынан киммәт хаҡҡа һатыуға сығарылыуы уларҙың юғары сифаты хаҡында һөйләмәй әле...**

Хәҙер күп кенә фирмалар аҙыҡ-түлек етештереүҙә ГМО (генетик модификацияланған организмдар) ҡуллана. Бындай организмдар тураһында күптәрегеҙҙең ишеткәне барҙыр, моғайын. Улар яһалма юл менән алына һәм кеше организмы өсөн зарарлы һанала. Белгестәр билдәләүенсә, ГМО күп кенә онкологик ауырыуҙарҙың сәбәпсеһе лә. Хатта ҡайһы бер Европа илдәрендә балалар өсөн әҙерләнгән продукттарҙа ГМО ҡулланыу бөтөнләй тыйылған.

Ҡайһы бер белгестәр фекеренсә, уның файҙалы яҡтары ла бар. Улар ошондай дәлил килтерә: тап ГМО аҙыҡ-түлек һатыу эшендәге ҡыйынлыҡтарҙы еңергә ярҙам итәсәк, Африка кеүек артта ҡалған илдәрҙе аслыҡтан ҡотҡарыу сараһы буласаҡ. Әммә кукуруз, соя, картуф һымаҡ ГМО-үҫентеләр ҡулланыусы өсөн тәбиғиләренә ҡарағанда күпкә киммәтерәккә төшә. Һәм уларҙы күпләп үҫтереү ер йөҙөндә төрлө үҫемлек-мутанттарҙың барлыҡҡа килеүенә килтереүе мөмкин.

Балалар яратып туҡланған аҙыҡ-түлектең составында һаулыҡ өсөн зыянлы матдәләрҙең булыуы күптән билдәле, уларҙың ҡайһы берҙәренә айырым туҡталып үтәйек.

## Газлы эсемлектәр

Уларға "Кока-Кола", "Пепси", "Сэвен-Ап", "Миринда", "Фанта", "Тархун", "Буратино" кеүек эсемлектәр инә. Газлы эсемлектәрҙең составында һаулыҡ өсөн зарарлы төрлө кислоталар була. Лимон кислотаһы (Е330), мәҫәлән, тештәргә насар йоғонто яһай. Фосфор кислотаһы (Е338) һөйәктәрҙең һыныусанлығына килтерә.

**"Кока-кола"** – газлы эсемлек. Рәсәйҙә бик популяр. Илебеҙгә ул егерме ике йыл элек үк үтеп ингән. Әлбиттә, компания адреналин биреүсе был эсемлекте әҙерләү технологияһын һәм уның төп составын сер итеп тота. Әммә "Кока-Кола"ның һаулыҡ өсөн зыянлы матдәләрҙән тороуы билдәле. Шуларҙың береһе – аспартам (Е951). Ул – составына фенилаланин (C9H11NO2) ингән, шәкәрҙе алыштырыусы синтетик элемент. Фенилаланин булғанға күрә ("бәхет гормондары"на йоғонто яһай), "Кока-Кола"ны күпләп эсеү депрессияға килтерә. Ә инде аспартам һыуһынды ҡандырмай, киреһенсә, көсәйтә генә. "Кока-Кола"нан һуң тағы һыуһау тойғоһо барлыҡҡа килһә лә, ул эсемлекте күп эсергә тырышмағыҙ. Әҙ генә миҡдарҙа эскәндә генә уның организмға зыяны кәмей.



## Һағыҙҙар

Балалар ғына түгел, өлкәндәр ҙә бик яратып сәйнәй уларҙы. Һағыҙҙарҙы кәрәгенән артыҡ ҡулланыу аппетитты боҙа, аллергик реакцияларға һәм эсәк-ашҡаҙан юлдарының ҡуҙғыуына килтерә.



**"Орбит"** – киң таралған һағыҙҙарҙың береһе. Регуляр рәүештә һағыҙ сәйнәү тештәрҙе нығыта тигән мифҡа ышанып, көнө буйы ауыҙыңдан һағыҙ төшөрмәй йөрөргә ярамай. Уларҙы ашағандан һуң 2-3



минут сәйнәү ҙә етә. “Орбит” ҡына түгел, башҡа һағыҙҙарҙы ла күп ҡулланыу ҡанда холестерин кимәленең күтәрелеүенә, аллергик реакцияларға килтерә, сөнки уларҙың составына бутилгидроксианизол (Е320) инә. Был һағыҙҙы шәкәрһеҙ тип йөрөтәләр. “Орбит”ҡа татлы тәмде составындағы мальтит (Е965) бирә. Икенсе төрлө уны мальтит сиропы (С12Н24О11) тип тә йөрөтәләр. Был матдәнең организмға зарары юҡ тиерлек. Диабетиктар өсөн инде ул файҙаға ғына.

## Чипсылар һәм шәкәрә

Кескенә сабый баланан алып мәктәп уҡыусыһына тиклем бик яратып ашай уларҙы. Шәкәрә һәм чипсыларҙы махсус рәүештә яһалған ҡамырҙан йәки сей картуфтан әҙерләйҙәр. Составы яғынан улар бербереһенә оҡшаш. Әҙерләү барышында күп күләмдә үҫемлек майы, тоҙ, тәмләткестәр һәм углеводтар ҡулланыла. Улар, үҙ сиратында, һимереүгә, ашҡаҙан һәм эсәк ауырыуҙарына килтерә.



**“Лейс”** – ҡулланылышта киң танылыу алған чипсыларҙың береһе. Рәсәйҙә генә түгел, бөтә донъяла таралған. Бигерәк тә американдар уны көндәлек тормошта йыш ашай. Уларҙы күп ҡулланғанда баш ауыртыуы, йөрәк тибеше йышайыуы, күңел болғаныуы, хәлһеҙлек күҙәтелеүе мөмкин. Сөнки чипсылар составына натрий глютаматы (Е621) һәм күп күләмдә лактоза инә. Лактоза – һөт шәкәре. Артыҡ ныҡ шәрбәтле була. Күп кенә кешеләр организмының лактозаны ҡабул итмәүенән ыҙалай. Шуға ла ҡайһы берәүҙәр бөтөнләй һөт эсә алмай. Е621 тәбиғи глютаматты алыштырыусы ғына. Ул организмға наркотиктар кеүек тәьҫир итеп, артыҡ күп ашауға килтерә. Ә инде организм өсөн артыҡ булған матдәләрҙең файҙаһынан зарары күберәк. Шуға ла һәр нәмәлә лә сама белергә кәрәк.

Әлбиттә, етештереүселәр продукттарҙың тулы составын сер итеп тота. Күп кенә ҡулланыусылар “Е” тамғаһы менән бирелгән матдәләрҙең ғәҙәттә ГМ-организмдар һәм продукттар булыуын бик яҡшы белә. Шуға күрә лә етештереүсе уларҙы дөйөм атамалар аҫтында ғына биреүҙе хуп күрә.



Халыҡ-ара “Е” тамғаһы менән билдәләнгән өҫтәлмәләрҙең яҡынса 1,5 мең төрө билдәле. Уларҙың классификацияһы 1956 йылда Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы тарафынан эшләнелгән. Шуларҙың ҡайһы берәүҙәре:

Е200-299 – консерванттар (аҙыктың яраҡлылыҡ ваҡытын оҙайта),

Е300-399 – антиокислителдәр (боҙолоуҙан һаҡлай). Шуға күрә лә магазин кәштәләрендәге һөттәр айҙар буйы әсемәй.

Е400-499 – стабилизаторҙар. Мармелад, йогурт кеүек тәмлекәстәрҙең консистенцияһын яҡшырта.

Е900-999 – дөйөм исемлектәргә инмәй ҡалыусылар – күперекте кәметәләр, шымалыҡ барлыҡҡа килтерәләр, ҡамырҙы ҡабарынҡы итәләр һ.б.

Ниндәй ҙә булһа аҙыҡ-түлектең составында “тәбиғигә оҡшаш (натуральноидентичные) ароматизаторҙар” тигән яҙыу күрһәгеҙ, был тулыһынса химикаттарҙы аңлата. Улар ризыҡҡа хуш еҫ биреү өсөн ҡулланыла.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, зарары билдәле булһа ла, етештереүселәр ГМО исеме аҫтындағы матдәләрҙе ҡулланыуҙан баш тартмай. Әлбиттә, тәбиғи организмдарҙан ғына торған аҙыҡ-түлекте табыуы ауыр, шулай ҙа үҫеүсе бала организмы өсөн тәбиғи аҙыҡ менән туҡланыу бик мөһим. Ауыл ерендә кеше, ғәҙәттә, үҙе етештергән аҙыҡ-түлек менән туҡлана. Унда бала, ниндәйҙер кимәлдә, зыянлы химикаттарҙан азат. Ә ҡала ерлегендә ауырыраҡҡа төшә.Ниҙер һатып алғанда составына күҙ һалыу бер кемгә лә ҡамасауламаҫ. Зарары беленә ҡалһа, ундай аҙыҡты ашауҙан баланы тыйырға кәрәк. Бик булмаһа – ҡулланыуҙы ҡыҫҡартырға. Балалар һәр саҡ ошоно иҫтә тоторға тейеш: тәмле нәмә күп булһа, ғәҙәттә, зыян итә.

**Н. АЛСЫНБАЕВА әҙерләне.**

Бөйөк еңеү

# Ике ҡоҙа, ике ветеран

**Йыл да Еңеү байрамы яҡынлашҡан һайын күңелебеҙҙе һағыш биләп ала. Ҡасандыр минең ике олатайым да был көндә ҡыуанып-тулҡынланып ҡаршылар, ентекле әҙерләнеп байрам тантанаһына сығып китерҙәр ине. Йәндәре Йәннәттә булһын! Хәҙер уларҙың данлыҡлы яу юлы тураһында төрлө иҫтәлектәре, күп һанлы наградалары ғына һөйләп тора.**





Атайымдың атаһы Теләүбаев Сәләхетдин Хөснөтдин улы 19 йәшендә генә һуғышҡа китеп, Польшағаса утлы юлдар үтеп, 1947 йылда яу ҡырынан имен-һау әйләнеп ҡайта. Малсылыҡ өлкәһендә фиҙаҡәр хеҙмәт күрһәткән егәрле колхозсыға Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған малсыһы тигән маҡтаулы исем бирелә. Хаҡлы ялға сыҡҡансы ул етәкләгән Нәби фермаһы районда һәр саҡ алдынғылар рәтендә һанала, яҡшы күрһәткестәргә өлгәшә. Өләсәйем Ғәрифә менән ете бала тәрбиәләп үҫтерәләр, уларҙың барыһы ла матур итеп ғаилә ҡороп, тыуып-үҫкән Бөрйәндәрендә донъя көтә.

Әсәйемдең атаһы – Тимер ауылынан Аллабирҙин Мортаза Ғәлләм улы, дәһшәтле яу йылдарында хеҙмәткә алына, хәрби алымдарҙы өйрәнгәс, 232-се уҡсылар полкы составында һуғышҡа инә. 1942 һәм 1943 йылдарҙа ҡаты яралана. 19 ғына йәшлек типһә тимер өҙәрлек егет һул күҙен юғалта, байтаҡ ваҡыт госпиталдә ятырға тура килә уға. Ғәрипләнеп ҡалһа ла, ҡулына яңынан ҡорал алып сафҡа баҫа, ул да Еңеүҙе Польша ерендә ҡаршылай, ә тыуған яҡтарына уға 1945 йылдың көҙөндә ҡайтып төшөргә насип була. Һуғыш тураһында һорашһаҡ: “Балаҡайҙарым, һеҙгә ул мәшхәрҙе күрергә яҙмаһын инде,” – ти торғайны Мортаза олатайым да. Тыуған ауылына ҡайтҡас, ал-ял белмәй колхоз йөгөн тарта ул. Ғаилә ҡороп, Йәмилә өләсәйем менән туғыҙ баланы аяҡҡа баҫтырып, тормош юлына сығаралар.

Ике олатайымдың да тантаналы Еңеү байрамында, күкрәктәрен орден-миҙалдары биҙәгән ҡупшы костюмдарын кейеп, митингынан ҡайтыуҙары, беҙ уларҙы бай табын әҙерләп көтөп ултырыуҙар һағындырып иҫкә төшә. Барыһы ла уларҙы ҡотлай, тирә-яғын күп һанлы балалары-ейәндәре уратып алған, күҙҙәрендә һағыш та, ҡыуаныс та балҡыған ҡарт яугирҙар ул көндәрҙә үҙҙәрен иң бәхетле кеше итеп тойғандарҙыр. Ике ҡорҙаш ветеран һәр саҡ һағынышып осрашырҙар, һуғыштағы тәьҫораттары менән уртаҡлашырҙар ине. Тимерҙәге олатайымдың йәйәүләп булһа ла елпелдәп атлап килеп еткәне бөгөнгөләй күҙ алдыбыҙҙа. Үҙ аллы оя ҡороп тормош көтә башлаған һәр балаһына ярҙам итеп, аҡыллы кәңәштәре, тәжрибәләре менән уртаҡлашып, Хоҙай биргән һәр тыныс таңға ҡыуанып йәшәне улар.

Кешелеккә тыныс, аяҙ көндәр бүләк иткән яугирҙарҙың яҡты иҫтәлектәре йөрәктәрҙә мәңге һаҡланыр!

**Альмира ТЕЛӘҮБАЕВА.**
**Бөрйән районының**
**Нәби ауылы.**

# СӘРМӘСӘН ҺӘМ ҠАРМАСАН ЙЫЛҒАЛАРЫ

*Исемдәре лә, холоҡ-фиғелдәре лә оҡшаш, йырҙарҙа йырланған Сәрмәсән менән Ҡармасан йылғалары Башҡортостандың көнбайышынан йәнәш тиерлек аға һәм икеһе лә Кушнарен районында Ағиҙелгә ҡоя. Сәрмәсән Бәләбәй районының Сәрмәсән ауылынан көньяҡтараҡ, 415 метр бейеклегендәге тау итәгенән башланып, Бүздәк, Благовар, Кушнарен райондары аша 186 саҡырым юл үтә. Ҡармасан иһә, Благовар районында баш алып, Благовар, Кушнарен, Өфө райондарынан 128 саҡырым үтә.*




„АМАНАТ" журналы
ЙОНДОҘЛОҒО
2010


Азат БИКСУРИН











## Nissan Juke

Был машина хатта тышҡы ҡиәфәте менән дә башҡаларға оҡшамаған. “В” класындағы кроссовер үҙенең исемен америка футболында дәғүәсене майҙандан этеп сығарыу алымынан алған.

Етештереүселәрҙең иҫәбе буйынса, ул Европала күптән үҙгә әүерелгән “Фольксваген”, “Опель”, “Мерседес”тарҙы баҙарҙан ҡыҫырыҡлап сығарырға тейеш. Шуға уны дәғүәселәрҙән һәр йәһәттән айырылырлыҡ итеп эшләргә тырышҡан.

190 ат көслөк моторының бензин һәм дизель төрҙәре бар. Беҙҙең юлдарҙа, әлбиттә, уның 215 саҡырымлыҡ тиҙлегенең кәрәге булмаҫ (Германия юлдарында, мәҫәлән, иң юғары тиҙлекте сикләү ҡаралмаған), әммә ҡеүәте һәм “вездеходлығы” бик таман булыр. Башҡаларҙан ул бейегерәк күренә, әммә багажнигы бәләкәйерәк.

# «Аманат» коллекцияһы



## Бе – 200

Иркутскиҙа 1998 йылда сығарыла башлаған “осҡос кәмә” хәҙер Таганрог заводында йыйыла. 38 тонналыҡ самолет-кәмә 12 тонна һыу алып, һыу өҫтөнән бер саҡырымлыҡ арауыҡта осоп китә ала.

8 мең метр бейеклектә ул 3600 саҡырым арауыҡҡа осорға һәләтле. Ҡоро ерҙән осоп китер өсөн уға 700 метрлыҡ аэродром юлы етә. Тутығыуҙан һаҡланыу саралары самолетты диңгеҙҙә файҙаланырға ла мөмкинлек бирә. Аэропорт булмаған яҡтарҙа уны һыуҙан сығарып ҡуйып, ярҙа хеҙмәтләндереү мөмкинлеге бар.

Был самолет, янғын һүндереүҙән тыш, йөк һәм пассажирҙар ташыу, санитар һәм эҙләү-ҡотҡарыу эштәрендә лә файҙаланыла ала.





# ҠУРАЙ ТАРТҠАН ЕГЕТКӘ, ҺЫЛЫУЫМ, БЕР ГЕНӘ КҮҘЕҢДЕ ҺАЛ...

**Аллаға шөкөр, республикабыҙҙа танылған, оҫта ҡурайсылар етерлек. Шуларҙың береһе– Ғата Сөләймәнов исемендәге республика конкурсы лауреаты Азат Биксурин башҡорт халыҡ көйҙәрен заманса башҡарыу, яңы стиль һәм вариациялар менән байытыу йәһәтенән башҡаларҙан айырылып тора. Кемгә нисектер, миңә Азаттың ҡурайҙа илһамланып башҡорт халыҡ көйҙәрен генә түгел, ә сит ил классикаһын, төрөк һәм кавказ көйҙәрен дә һыҙҙыртыуы бик ныҡ оҡшай. Популяр ҡурайсы менән беҙҙә ҡунаҡта булған әңгәмәне һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ.**

**– Азат, әйҙәгеҙ, иң тәүҙә һеҙҙең менән танышып китәйек...**

– 1975 йылдың 4 майында Баймаҡ ҡалаһында тыуғанмын. Бик йәшләй атай-әсәйһеҙ ҡалып, Кәримә картәсәйем тәрбиәһендә буй еткерҙем, белем алдым. Әйткәндәй, донъялағы иң ғәзиз, изге йән эйәһе картәсәйем әле 92 йәштә, именаман бер үҙе донъя көтә, беҙҙең ҡайтыуҙы һәр саҡ көтөп ала.

Ҡурайға килгәндә, уға һөйөү әсә ҡарынында уҡ һалынғандыр, тим. Атайымдың атаһы, Нурмөхәмәт ҡартатай, ҡурайҙа оҫта уйнаған. 10 йәшемдән балалар музыка мәктәбенә йөрөп, Рауил Сәфәрғәли улы Хәсәновтан ҡурайҙа уйнарға өйрәндем. Туғыҙынсы синыфтан һуң Учалы музыка училищеһының ҡурай бүлегенә уҡырға индем, унда миңә танылған шағир, прозаик Мәүлит Ямалетдиновтан һабаҡ алырға яҙҙы. 1994-99 йылдарҙа Өфө дәүләт сәнғәт академияһының башҡорт музыкаһы факультетында белем алдым. Виртуоз ҡурайсы Ишморат Илбәков синыфында уҡыным.



Студент йылдарында донъя классик музыкаһы менән ҡыҙыҡһына башлап, ҡурайҙа Моцарт, Вивальди кеүек композиторҙарҙың әҫәрҙәрен уйнарға өйрәндем. Академиянан һуң М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына оркестр артисы булып эшкә килдем. Быйыл Башҡорт дәүләт филармонияһына күстем.

**– Ҡурайҙарҙы махсус заказ биреп яһатып алаһығыҙҙыр, эйе бит?**

– Әлбиттә! Миңә уларҙы Күгәрсен районында йәшәүсе Рәмил Хөснуллин тигән оҫта эшләп бирә.

**– Сит илдәрҙә үткән конкурс, фестивалдәрҙә ҡатнашҡанығыҙ бармы?**

– Ҡаҙағстандың Алма-ата ҡалаһында уҙған халыҡ-ара фольклор фестивалендә ҡатнаштым. Быйыл йәй билдәле саксофонист Джех Петровский саҡырыуы буйынса Польшала үткәрелгән джаз музыка фестивалендә сығыш яһаным, “Һыр”, “Буранбай”ҙы уйнаным. Төрлө илдән килгән музыканттар менән аралашыу, уларҙың милли уйын ҡоралдарын ишетеү бик файҙалы булды.

**– Нисә альбомығыҙ сыҡты?**

– “Ҡурай-шоу” – I, II, III, IV һәм аҙаҡҡыһы “Баҫ, ҡыҙым, ҡурай тартам, тыпырҙатып баҫ” тип атала.

**– Ғаиләгеҙ тураһында ла бер нисә һүҙ әйтеп үтһәгеҙсе...**

– Ҡатыным Гөлназ – Стәрлебаш районынан. Һөнәре буйынса бухгалтер булһа ла, сәнғәткә битараф түгел, бәләкәйҙән бейеү менән шөғөлләнгән. Ике ҡыҙыбыҙ бар. Олоһо Ҡәҙриәгә – 12, кесеһе Шәүрәгә 6 йәш. Икеһе лә Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең балалар хореографияһы студияһында шөғөлләнә.

**– Буш ваҡытта нимә менән шөғөлләнәһегеҙ?**

– Ҡала ситендә баҡсам бар. Саҡ ҡына бушаһам, шунда йүгерәм. Яйлап өй төҙөйөм.

**– Отпускыны нисек үткәрәһегеҙ?**

– Башҡортостан буйлап сәйәхәт итергә яратам. Быйыл йәй, мәҫәлән, ғаиләбеҙ менән Ғафури районындағы Киндерле мәмерйәһенә барҙыҡ.

**– Журнал уҡыусы йәш дуҫтарығыҙға нимә теләрһегеҙ?**

– Тырышып белем алһындар, бәләкәйҙән алдарына маҡсат ҡуйып йәшәргә өйрәнһендәр. Киләсәктә йәш дуҫтарымдың үҙҙәре теләгән һөнәргә эйә булып, шунан йәм, кинәнес табып йәшәүҙәрен теләйем.

**Нурия ӘХТӘМОВА әңгәмәләште.**

“Аманат” йондоҙлоғо




Спортсы кеше нисек спорт тормошон белмәһен ти? Бына, “Шәп малай” конкурсының сираттағы сығарылышы донъя күреүе булды, Өфөнән электрон хат килеп тә төштө. **“Мин Батыр Биргәнов. 20-се гимназияла 4-се синыфта уҡыйым. Өфөлә йәшәйем. Хоккейға йөрөнөм, хәҙер футбол менән мауығам. Журналдағы хоккейсыларҙы танығым, сөнки Салауат Юлаев”тың уйындарын ҡарарға ”Өфө-арена”-боҙ һарайына ла йөрөйөм, телевизорҙан да күрәм”**, – тип яҙа ул. Шулай итеп, беренсе булып дөрөҫ яуапты **Батыр** ебәрҙе. Уның артынан **Әбйәлил районы Ташбулат урта мәктәбенең 9-сы синыфы уҡыусыһы Илшат Хәсәновтан** дөрөҫ яуап килде.

Еңеүселәрҙе ҡотлайбыҙ! “Аманат”тың Маҡтау билдәләрен көтөгөҙ

* * *

**Ә хәҙер был спортсыларҙың кем икәнен, йә, кем беренсе белер һәм хәбәр итеп өлгөрөр – шул еңеүсе!**

**Һеҙҙән хат-хәбәр көтәбеҙ!**

**СМС-хәбәр ебәрер өсөн кеҫә телефонынан 3443 номерын һәм «Малай» префиксын йыйырға кәрәк.**


1

2

3

4

5

6

7

8

9

10

11

12

## Дөрөҫ яуаптар 09-2010:

1. Вячеслав Аркадьевич Быков (баш тренер)
2. Герсонский Сергей Рафаэльевич (өлкән тренер)
3. Сафин Венер Расихович (өлкән тренер)
4. Захаркин Игорь Владимирович (өлкән тренер)
5. Костичкин Павел Викторович (Видео. тренер)
6. Антипов Владимир (һөжүм итеүсе)
7. Мирослав Блатяк (һаҡсы)
8. Никита Давыдов (ҡапҡасы)
9. Александр Еременко (ҡапҡасы)
10. Артем Гордеев (һөжүм итеүсе)
11. Игорь Григоренко (һөжүм итеүсе)
12. Михаил Григорьев (һаҡсы)
13. Дмитрий Калинин (һаҡсы)
14. Якуб Клепиш (һөжүм итеүсе)
15. Константин Кольцов (һөжүм итеүсе)
16. Виталий Колесник (ҡапҡасы)
17. Кирил Кольцов (һаҡсы)
18. Максим Кондратьев (һаҡсы)
19. Виктор Козлов (һөжүм итеүсе)
20. Андрей Кутейуин (һаҡсы)
21. Александр Логинов (һаҡсы)
22. Алексей Медведьев (һөжүм итеүсе)
23. Роберт Нилссон (һөжүм итеүсе)
24. Виталий Прошкин (һаҡсы)
25. Александр Радулов (һөжүм итеүсе)
26. Олег Сапрыкин (һөжүм итеүсе)
27. Петр Счастливый (һөжүм итеүсе)
28. Вячеслав Селуянов (һаҡсы)
29. Томаш Староста (һаҡсы)
30. Александр Свитов (һөжүм итеүсе)
31. Андрей Таратухин (һөжүм итеүсе)
32. Патрик Торесен (һөжүм итеүсе)
33. Дмитрий Цыбин (һөжүм итеүсе)
34. Олег Твердовский (һаҡсы)
35. Игорь Волков (һөжүм итеүсе)
36. Сергей Зиновьев (һөжүм итеүсе)

# Ҡама




**Ҡама (выдра) – һыуһарҙар ғаиләһенә ҡараған һыу йәнлеге. Ул үҙ нәҫелдәштәренән байтаҡҡа ҙурыраҡ, эт ҙурлығында, әммә, аяҡтары ҡыҫҡа булыуы сәбәпле, тәпәш һәм оҙон күренә. Донъяла ҡамаларҙың 17 төрө таралған. Кәүҙәһе – 95, ҡойроғо 55 сантиметрға, ауырлығы 10 килограмға етә. Артҡы аяҡтары ҡаҙ тәпәйе кеүек йөҙгөслө, шуға ҡаманың йәшәгән ерендә ҡышын үҙенсәлекле эҙҙәр ҡала. Башҡа һыу йәнлектәре кеүек үк, ҡама ояһын ярҙа ҡаҙып яһай, әммә уның ишеге һыу аҫтынан була. Ҡама һыуҙа бик яҡшы йөҙә, шуға хәүеф янағанда тиҙ генә һыу аҫтына ҡаса. Күпселектә яңғыҙ йәшәүсе йәнлек ярайһы уҡ уҫал. Балыҡ менән туҡлана, ҡоро ергә сыҡҡанында яр буйындағы ҡош ояларын туҙҙыра, эләккәндә өлкән ҡоштарҙың үҙҙәрен дә ашап ҡуя, тәлмәрйендәрҙән дә баш тартмай, ҡыҫҡаһы, ризыҡты бик һайлап тормай.**

Һыу буйында ул ҡышын туңмай ҡала торған урындарҙы эҙләй. Йылғалар туңһа, икенсе урын эҙләп бик алыҫ араларға күсеп китеүе ихтимал. Йомшаҡ һәм йылы туны һыуҙа еүешләнмәй, йылҡылдап тора. Уның ҡара-көрән, ҡорһаҡ яғында аҡһыл тиреһе ныҡ ҡиммәтле булыуы сәбәпле, ҡама һунарсылар тарафынан ҡырылып бөтә яҙған (шул сәбәпле “ҡама” һүҙе башҡорт халҡында ҡиммәтле тире мәғәнәһендә лә йөрөй), беҙҙең яҡтарҙа ул бик һирәк ҡалған.

Башҡортостанда “ҡама” һүҙенән яһалған йылға исемдәре байтаҡ, мәҫәлән, элегерәк Белорет районындағы Инйәр суйын заводы ла Ҡамайылға тип аталған. Тире эшкәртеүҙә ҡама тиреһененең ныҡлығы 100 процент итеп алынған, башҡаларҙы уның менән сағыштыралар. Эшкәрткәндә тиренең оҙон йөндәре йолҡоп алына, йомшаҡ һәм ҡалын мамығы ғына ҡалдырыла.

Йәй башында инә ҡаманың 2-4 балаһы тыуа. Улар ҡышҡа тиклем әсәләре менән йәшәй, уларҙы өңөнә балыҡ ташып ашата.







11 октябрь – Республика көнө

# БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ДӘҮЛӘТ СИМВОЛДАРЫ ТАРИХЫНАН



Автономиялы Башҡорт Республикаһының 1918 йылдың 20 августында ҡабул ителгән тәүге дәүләт флагы.




Автономиялы Башҡорт Совет Социалистик Республикаһының 1920 йылда ҡабул ителгән дәүләт флагы.



Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының 1924 йылдың 11 октябрендә ҡабул ителгән дәүләт флагы.



Башҡорт АССР-ның 1925 йылдың 25 октябрендә ҡабул ителгән, әммә Үҙәк совет власы тарафынан раҫланмаған дәүләт гербы.



Башҡорт АССР-ның 1925 йылда ҡабул ителгән дәүләт гербы.



Башҡорт АССР-ның 1937 йылда ҡабул ителгән дәүләт гербы.



Башҡорт АССР-ның 1978 йылдың 30 майында ҡабул ителгән дәүләт гербы.




Башҡортостан Республикаһының 1993 йылдың 12 октябрендә ҡабул ителгән дәүләт гербы.




Башҡорт АССР-ның 1937 йылда ҡабул ителгән дәүләт флагы.




Башҡорт АССР-ның 1938 йылдың 9 февралендә ҡабул ителгән дәүләт флагы.




Башҡорт АССР-ның 1954 йылдың 31 мартында ҡабул ителгән дәүләт флагы.



Башҡортостан Республикаһының 1992 йылдың 25 февралендә ҡабул ителгән дәүләт флагы.

С. ЮЛАН әҙерләне.

## Рәхмәт һиңә, “Аманат”!

“Дуҫ булайыҡ!” рубрикаһында адресым сыҡҡас, күп кенә хаттар, смс-хәбәрҙәр һәм шылтыратыуҙар булды. Башҡортостандың төрлө төбәктәренән яңы дуҫтар таптым. Мин үҙем илгәҙәк, аралашыусан булғанға, яңы танышыуҙарға шатмын. Әлеге ваҡытта Ғафури районынан Илнур Солтанов һәм Динар Килмөхәмәтов, Айгизә, Илмира, Зимфир (Ауырғазы), Булат (Ишембай), Динис (Учалы) менән бәйләнеш тотам. Киләсәктә лә дуҫтар менән аралашыуҙы дауам итәсәкмен. Иң мөһиме: “Аманат” журналы менән бәйләнешта өҙмәйәсәкмен!

**Гөлназ АЛТЫНБАЕВА.**
**Әбйәлил районың**
**Рәхмәт ауылы.**




***

12 йәш. Ҡыҫала. Яраткан шөғөлөм – йырлау. 12-14 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәм.

**Әлембәтова Әлиә.**
**453235, Ишембай районы,**
**Әхмәр ауылы,**
**Урал урамы, 9.**

***

Илүзә (Һыуғояр) – 13, Илгизә (Ҡуҙы) 14 йәштә.
13-14 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәбеҙ.

**Әхмәтханова Илүзә,**
**Ғәйнетдинова Илгизә.**
**452563, Мәсетле районы,**
**Әбдрәхим ауылы.**

***

14 йәш. Һыуғояр. Буш ваҡытта бәйләргә, сигергә, бешеренергә яратам. Йәштәштәремдән хат көтәм.

**Арғынбаева Гөлйөҙөм.**
**453662, Баймаҡ районы,**
**Муллаҡай ауылы,**
**Танһыҡкужин урамы, 7.**

***

13 йәш. Ҡыҙ. 13-15 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат йәки шылтыратыуҙар көтөп ҡалам.

**Ғәлиуллина Нурзидә.**
**453684, Йылайыр районы,**
**Юлдыбай ауылы,**
**Октябрь урамы, 16,**
**Т.: 89373594197.**
**ICQ: 403566436.**

***

Гөлдәр – 12, Гөлназ 13 йәштә. Йәштәштәренән хат көтәләр.

**Мырҙабулатова Гөлдәр.**
**453676, Баймаҡ районы,**
**Сәйғәфәр ауылы,**
**Тыныслыҡ урамы, 22.**
**Т.: 89063722503.**
**Исхаҡова Гөлназ.**
**Зәки Вәлиди урамы, 13.**
**Т.: 89656612670.**

***

10 йәш. Һыуғояр. Буш ваҡытта ҡул эштәре менән булырға яратам. 10-12 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙар хат яҙһын йәки шылтыратһын ине.

**Сәхибгәрәева Эльвина.**
**452663, Баҡалы районы,**
**Ҡуштирәк ауылы, 51.**
**Т.: 8(34742) 27264.**

***

12 йәш. Буш ваҡытта футбол уйнайым, атайәсәйемә ярҙам итәм. 12-13 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат йәки смс көтәм.

**Батыршин Батыр.**
**453605, Әбйәлил районы,**
**Әбдрәш ауылы,**
**Көрәй урамы, 13.**
**Т.: 89659304709.**

***

14 йәш. Кумирҙарыбыҙ – МС Баш, Анжелика, Dany. Буш ваҡытта бейергә яратабыҙ. 14-16 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәбеҙ.

**Сәлимйәнова Нәркәс.**
**453500, Белорет ҡалаһы,**
**Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 178.**
**Т.: 89063717956.**
**ICQ: 413296938.**
**Баһауетдинова Рәлиә.**
**Т.: 89273510960.**
**ICQ: 393841382.**

*Ҡәҙерле дуҫтар! Ошо биттә яҡындарығыҙға, дуҫ-иштәрегеҙгә СМС-сәләмдәрегеҙҙе лә баҫтыра алаһығыҙ. Бының өсөн 3443 номерына смс ебәрегеҙ. Тик хәбәрҙе яҙғас, “Хат” префиксын ҡуйырға онотмағыҙ.*

# КАРАСАЙ ҺЫЛЫУЫ

Ай, һылыу!

**Мин, Әлиә Шәйхетдинова, 1993 йылдың 11 октябрендә Өфөлә тыуғанмын. Китап уҡыуҙан, ҡыҙыҡлы кешеләр менән аралашыуҙан йәм табам. Киләсәктә үҙемде физкультура уҡытыусыһы итеп күҙ алдына килтерәм. Әлегә “Һылыуҡай” гүзәллек студияһында шөғөлләнәм, йүгереү, саңғы спорты**





**Лилиә Ҡаһарманова, Бөрйән районының Байназар ауылынан:** “Буш ваҡытта китап уҡырға, бәйләргә, сигергә, шиғыр-әкиәттәр яҙырға яратам. Әүҙем яҙышканым өсөн “Йәншишмә” гәзитенең йәш хәбәрсеһе исеменә лайыҡ булдым”.



**Ләйсән Ғәниева, Салауат районының Лағыр ауылынан:** “Районда үткән олимпиада, конкурстарҙа ҡатнашам, призлы урындар яулайым. Тормош девизым: “Ҡыйынлыҡтарға ҡарамай, тик алға барырға!”



**Айһылыу Аксулпанова, Стәрлетамаҡ районының Күсәрбай ауылынан:** “Атай-әсәйемде һөйөндөрөп, гел “бишле”гә өлгәшәм, бәйләргә, сигергә әүәҫмен”.



**Әҙилә Хәбибуллина, Ишембай ҡалаһынан:** “Буш ваҡыт булһа, китап уҡыйым, бәйләйем һәм һүрәт төшөрәм. Киләсәккә хыялым – филолог булыу”.

# ПРИЧЕСКА ЭШЛӘП ҠАРАҒЫҘ

Һәр ҡыҙ үҙ-үҙен ҡарап, өҫ-башын бөхтә йөрөтөргә, йөҙ-ҡиәфәтенә иғтибар бирергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта сәсенә матур прическалар ҙа эшләргә өйрәнһә, киләсәктә гүзәл затҡа быныҡ, һис шикһеҙ, кәрәге тейәсәк.

Булмаһа, әйҙәгеҙ, был һанда прическа яһарға өйрәнеп ҡарайыҡ.

Оҙон сәс булғанда (ижад итеү өсөн мөмкинлектәр күберәк) прическа эшләүе күпкә еңелерәк. Беренсенән, оҙон сәстәрҙе матур таҫмалар йәки епкә теҙелгән мәрйендәр менән ҡуша үрергә була. Икенсенән, сәс остарын еңелсә генә бөҙрәләтеп, йыймай төшөрөп йөрөтөргә була. Баш осона биҙәкле ҡыҫтырғыс йәки матур сәскә таҡҡанда, прическа ҡупшыраҡ күренер.

Сәсте үреү юлдары бихисап: ғәҙәти, классик, францыҙдарса, башаҡ рәүешендә үреүҙәр һ.б. Күп толомло прическа эшләгән саҡта иғтибарлы булырға кәрәк: толомдар бер төрлө йыуанлыҡта булырға тейеш, юғиһә прическаның хужабикәһе хаҡында кире фекер уяныуы ихтимал...

Ҡыҫҡа сәстә прическа эшләүе күпкә ҡатмарлыраҡ. Был осраҡта аксессуарҙарға – ҡыҫтырғыстарға өҫтөнлөк бирелә. Шулай уҡ туҙҙырылған сәстәр менән толомдарҙың сиратланыуы матур күренәсәк. Ике-дүрт урындан толомдар үреп, ҡалын булмаған төҫлө резинкалар менән биҙәргә мөмкин. Шулай уҡ күҙгә күренмәҫ ҡыҫтырғыстар ярҙамында сәс өлтөктәрен нығытып ҡуйырға була.

## Сағыу резинкалы прическа




Сәсте артҡа табан тарағыҙ, һуңынан ике өлөшкә бүлегеҙ – өҫкө һәм аҫҡыға (аҫҡыһы ҙурыраҡ булырға тейеш). Өҫкө өлөшөн сағыу резинка менән ҙур булмаған «ҡойроҡ»ҡа йыйығыҙ. Аҫҡы өлөштәрен дә шулай уҡ нығытығыҙ. Прическа әҙер.

## Бер нисә толомло «ҡойроҡ»







Сәстәрҙе тәбиғи үҫеше буйынса өҫкә табан тарап, ҡойроҡ эшләгеҙ ҙә резинка менән уратып ҡуйығыҙ.

Сәсегеҙҙе, нисә толом үреүгә ҡарап, бер нисә өлөшкә бүлегеҙ. Бер өлөшөн алып, өскә бүлегеҙ һәм классик толом үрегеҙ. Һуңынан резинка менән нығытығыҙ.

Башҡа өлөштәрҙе лә шулай уҡ үрегеҙ.

Бер толомдо алып, ҡойроҡ өҫтөндәге резинканан уратып ҡуйырға була – ул саҡта прическа өҫтәрәк торасаҡ.

**Айһылыу АБДУЛЛИНА әҙерләне.**






Һеҙҙең турала кемдер белгән өсөн генә араларҙы өҙгән егет һинең иғтибарыңа лайыҡ түгел, һылыу. Көслө зат һәр саҡ көслө булып ҡалырға тейеш. Шуның өсөн дә һағышланырға кәрәкмәй. Бөтән тормошоң алда әле!

**Гөлсәскә апайың.**

## Изге теләк

Серле кистәр, айҙ төндәр...
Урамдарҙан үттек бергә.
Өнһөҙ генә серләшкәнде
Һис белмәне шул берәү ҙә.
Күктәге яҡты йондоҙҙар
Йылмайып бакты беҙгә,
Әйтергә теләгән һымаҡ:
"Булығыҙ һеҙ гел бергә!"

**Гөлнур СОЛТАНБАЕВА.**
**Учалы районының**
**Ураҙ лицейы.**

## Иғтибар итмәҫкә тырыш

Мәктәп йылдары – кеше ғүмерендә иң матур миҙгелдәрҙең береһе. Фәһемле дәрестәр, уҡытыусыларҙың өгөтнәсихәттәре, синыфташтар менән аралашыу – барыһы ла күңел түрендә уйылып ҡала. Бигерәк тә тәүге һөйөү хистәрен кисереү ошо уҡыу осорона тап килә. Әлбиттә, үҫмерҙәр араһында исем тағып үсекләшеү ҙә, ҡыҙҙар һәм егеттәрҙең тойғоларынан төрлөсә көлөү ҙә тәбиғи күренеш. Шуға, Ынйыҡай, һиңә тиҫтерҙәреңдең был ҡылығына артыҡ иғтибар итмәҫкә кәрәк. Бер ни булмаған кеүек, ҡуша көл, уйна, шаяр. Аҙаҡ, мәктәпте тамамлағас, иҫләрлек бер хәтирә булыр. Тик бына егетеңдең улай еңел һылтау табып, һинән тиҙ һыуыныуы хафаға һала. Әгәр ул һине ихлас күңелдән оҡшатһа, синыфташтарыңдың көлөүенә генә бирешеп тормаҫ ине.

Миненсә, мөхәббәттең бер ояты ла юҡ, кемдәр һөйөү ҙә яҙыҡ түгел. Иң мөһиме – ғашиҡтарҙың үҙ-ара бер-береһен аңлап, әйләнәтирәләгеләрҙең һүҙҙәренә ҡаршы тора алыуҙары. Сөнки ысын хистәр һынауҙар үткән һайын бары сынығa ғына.

**Зарина БАҒЫШАЕВА,**
**БДУ студенткаһы.**

## Барыһы ла алда әле!

"Аманат"тың 9-сы һанында донъя күргән Ынйыҡайҙың хатын иғтибарҙан ситтә ҡалдыра алманым. "Мөхәббәттең ни ояты бар, кемделер һөйөү яҙыҡмы ни?" – тип һорай ҡыҙ. Мөхәббәттең бер ояты ла юҡ, һылыу. Әммә уны көлкөгә әйләндереүселәр, яҙыҡ булмағандан оялыусылар ғына бар.

Әлбиттә, үҙеңдән кемдер бармаҡ төртөп көлгән саҡта битараф ҡалыу ауыр. Шулай ҙа һәр нәмәнән уйын эҙләгән малайҙарҙың һәр төрлө үсекләшеүҙәренә иғтибар итмәҫкә тырыш. Битараф ҡала белһәң, улар ҙа көлөүҙән туктар.

Нисек кенә булмаһын, кемдер берәү шаярып көлгән өсөн генә араларҙы өҙөү дөрөҫ түгел. Һеҙҙең йөрөгәнде бөтә мәктәптең белеүе, булған хистәрҙе юҡҡа сығарып, айырылышыуға сәбәп була алмай. Һөйөү гөлөгөҙ сәскә лә атып өлгөрмәгән икән, тимәк, уға һыу һибеүсе булмаған. Мөхәббәт сәскәһен тик икәү генә үҫтерә ала. Иң мөһиме – ситтәрҙең ҡырын һүҙенә иғтибар итмәй, үҙ хистәрең өсөн көрәшеү.

# Социаль селтәр

Am@net

Социаль селтәр шөғөлдәре һәм ғәҙәттәре оҡшаш кешеләрҙе интернет аша берләштереүҙән барлыҡҡа килә. Ғәҙәттә, кеше үҙенә кәрәк йомошто таныштары аша белешеүҙе хуп күрһә, социаль селтәрҙәр системаһы ана шул виртуаль танышлыҡты тәьмин итә. Тап шул танышлыҡтың виртуаль ғына булыуынан бик күп алдаҡсылар, муттар, шылғаяҡтар оҫта файҙалана ла инде. Шул сәбәпле социаль селтәрҙәрҙең кире яғы ла килеп сыға.

Элемтә электрон почта сервисы аша йәки хәбәрҙәр менән тиҙ аралашыу сервисы ярҙамында башҡарыла. Ҡайһы бер социаль селтәрҙәр бер жанрҙағы кинофильмдарҙы һөйөүселәрҙе йыйһа, икенселәре көй-моң, китаптар, ҡул эштәре һәм башҡа әйберҙәр менән мауығып, аралашып, фекер алышып, уртаҡ тел тапҡан кешеләрҙе берләштерә. Селтәрҙе төрлө категорияларға бүлеү фолксономия тип атала.

**Фолксономия** (инглиз һүҙе folksonomy, folk — халыҡ + taxonomy таксономия – грек һүҙе, бер рәттән тәртиптә тотоу) — йәғни булған шөғөлдәрҙе категорияларға бүлеү.

**Селтәрҙең төҙөлөшө**

Был сайттарҙа баштан уҡ үҙеңдең исем-шәрифеңде теркәйһең, тыуған көнөңдө, йылыңды, ниндәй мәктәптә, юғары уҡыу йортон тамамлауыңды билдәләйһең (күпселек осраҡта кеше үҙе тураһында төптө буш уйҙырмалар яҙып ҡуя). Яратҡан йырҙарыңды, фильмдарҙы, уҡыған әҙәби китаптарыңды теҙеп сығаһың. Ниндәй тарихи урындар%ҙа, ял итеү урындарында булғаныңды ла теркәргә мөмкин. Шулай уҡ үҙеңдең дуҫтарыңды, туғандарыңды, ҡасандыр бергә уҡыған иптәштәреңде йыяһың. Бик күп таныштарың менән төрлө төркөмдәр асып, үҙең яратҡан темаларға әңгәмәләр алып барыу мөмкинлеге бар.

**Иң билдәле социаль селтәрҙәр**

Ҡулланыусылар һаны буйынса беренсе урында MySpace (255 000 000 ҡулланыусы) селтәре тора, артабан: Facebook (500 000 000), Windows Live Spaces (120 000 000), Habbo Hotel (121 000 000), Friendster (Филиппиндар, Малайзия, Индонезия, Сингапур, 90 000 000), Hi5 (80 000 000), В Контакте (75 000 000), Tagged.com (70 000 000).

**Реклама**

Реклама эшләүсе кешеләргә үҙен күрһәтеү өсөн социаль селтәрҙәр уникаль мөмкинлектәр бирә. Социаль селтәрҙәргә көн һайын кергән миллионлаған кеше компаниялар, тауарҙар, хеҙмәтләндереү тураһында әңгәмә алып бара һәм үҙҙәренең тәьҫораттары менән бүлешә, баһаларын һәм кәңәштәрен бирә.

Реклама баҙарының күләме социаль селтәрҙәрҙә үҫә генә. 2007 йылда, eMarketer аналитик компанияһы тикшереүҙәре буйынса, уларҙа төрлө юлдар менән алып барылған реклама күләме 1,225 млрд. долларға тиклем күтәрелә, ә 2011 йылға баҙарҙың күләме 3,8 млрд. долларға тиклем үҫәсәк. Күбеһенсә реклама көнкүреш тауарҙары, спиртлы эсемлектәр, автомобилдәр, күңел асыу индустрияһы тармаҡтарына таралған.

**Социаль селтәрҙәге хәүеф**

Ҡайһы бер кешеләр, аңламайынса, селтәрҙә төрлө аферистар ҡуйған мәғлүмәткә ышанып, ҙур боҙоҡлоҡтар эшләргә әҙер. Ҡомарлыҡҡа бирелеп, бөтөн донъяһын һатып бөтөүселәр, бер ҡатлыланып, буш афераға әлегеүселәр генә түгел, ярамаған мәғлүмәтте биреп тә һемәйеүселәр бар. Ни генә тимә, кешенең үҙенең күҙенә ҡарап аралашыу әлегәсә бар донъяла иң ышаныслы юл тип һанала.

**«Мин интернетты нисек файҙаланам?» – тигән һорауға Рәсәйҙә ошондай яуап бирәләр:**

* 70,8% блогтарҙы уҡыйҙар.
* 27,7% блог алып баралар.
* 71,1% “Социаль селтәрҙә” үҙҙәренә профиль асҡандар.
* 52,5 % интернетҡа фотоһүрәттәр һалалар.
* 56,6% RSS-яңылыҡтарға яҙылалар.

**Рус телле селтәрҙәр:**

Бәйләнештә (ВКонтакте)

Минең ҡор (Мой Круг)

Минең донъя (Мой Мир@mail.ru)

Класташтар (Одноклассники.ru)

Көндәлек (Живой журнал-ЖЖ)

**Инглиз телле селтәрҙәр:**

Bebo
Facebook (рус телендә лә бар)
Last.fm (рус телендә лә бар)
LinkedIn
MySpace (рус телендә лә бар)
XING
MyAnimeList
Twitter (рус телендә лә бар)

# “Ил ижады – аҫылташ”

**Был өмәне беҙ апрель һанында башлағайныҡ. Уның шарттарына ярашлы, һеҙ башланған хикәйәне үҙегеҙ дауам итеп беҙгә яҙып ебәрергә тейеш инегеҙ. Күрәһең, беҙҙең уҡыусылар араһында буласаҡ яҙыусылар табылманымы, әлегә тиклем килгән хаттар араһында лайыҡлы дауамдар осраманы. Йыл аҙағына тиклем өс баланың мажаралары тамамланырға тейеш тәһә. Уларҙы һаман да шул мәмерйәлә бикләп ҡалдырмаҫһығыҙ, моғайын. Тағы ике һанда донъя күрәсәк өмә дауам итә. Ни менән ҡайтыр ул балалар был сәйәхәттәренән? Һеҙҙән хаттар көтәбеҙ, дуҫтар.**

## Яҡтылыҡҡа юл

Шишмә буйлап ҡына эскә кереүҙәре малайҙарға ниндәйҙер өмөт бирә ине әле, сөнки ҡараңғыла ла уның тауышы буйлап атлап, тышҡа сығырға мөмкинлек бар ине. Һалҡын һыулы кескәй генә инеште тойор өсөн уны йыш ҡына ҡул менән һәрмәп ҡарарға ла кәрәк була, дөм ҡараңғыла мәтәлләп тә киттеләр, һыуҙы кисеп барырға ла тура килде. Саҡ ҡына атлағас та балалар лыс һыу булды, өшөп ҡалтырана башланы. Ҡыҙыҡ эҙләп кенә был мәмерйә эсенә килеп кереүҙәренә, ғөмүмән, был сәйәхәткә сығып китеүҙәренә мең тапҡыр үкенеп өлгөргәндер һәр ҡайһыһы.

Ләкин илап ултырыуҙан фәтүә юҡ, бынан барыбер нисек тә сығырға кәрәк. Шуға шыңшып үкһей башлаған Гөлнурҙы ике яҡлап етәкләп, малайҙар серәшеп алға барыуҙарын дауам итте. Иң мөһиме – шишмәне юғалтмаҫҡа, тигән маҡсат ҡуйҙы Илнур. Шунан башҡа был таш кәпүә эсендә ғүмерлеккә тороп ҡалыуың да ихтимал бит. Уларҙы бында кемдер килеп табыр, тигән өмөт тә юҡ, сөнки был мәмерйәнең барлығын ауылда ла белмәүҙәрен асыҡланылар ҙаһа.

Әлбиттә, бара биргәс Илнурҙың башына бер шик тә төшөп ҡуйҙы. Улар шишмә буйлап түбән төштөләр, ә уға юлда икенсе яҡтан да берәй шишмә килеп ҡушылманы микән? Тик был шиген ул ҡысҡырып әйтергә баҙнат итмәне. Шик бер кереп оялаһа, унан тиҙ генә ҡотолорлоҡ түгел шул. Яман сир кеүек ул, аҙаҡтан үҙең дә шуға ышана башлайһың.

– Йәмил, беҙ түбән төшкәндә ҡайһы яҡтан яңы тармаҡтар барлығын абайламаныңмы? – тип һораған булды ул ниҙер әйтер өсөн генә.

– Мин, бая оҙаҡ төштөкмө икән, тип уйлап киләм әле, – тип Йәмил, оҙаҡ килдекме икән, тигән уйҙы ярып һалды. Ысынлап та, сәғәт тә булмағас, хәйер, был ҡараңғыла сәғәтте ҡарау ҙа мөмкин булмаҫ ине, тағы яңылышып китһәң дә, икенсе тармаҡ буйлап та күпме барырға мөмкин икән?

– Сығарығыҙ инде, малайҙар, – тип инәлде дер-дер ҡалтыранған, ҡалтыраныуы хатта тауышына сыҡҡан Гөлнур.

Малайҙар бер ни өндәшмәне. Ни әйтәһең инде бындай ваҡытта? Сығарып ҡына ҡуйырға юлын белергә кәрәк әле уның. Ҡорһаҡҡа һәм арыуға ҡарап, Илнур үҙенсә байтаҡ ваҡыт үтеүен, моғайын да улар икенсе тармаҡҡа инеп киткәндәрен самалай ине инде. Тик нисек был хаҡта башҡаларға әйтергә? Ярай әле мәмерйәнең иҙәне сағыштырмаса тигеҙ. Юҡһа ҡапыл берәй упҡынға барып осорға ла күп ҡалмаҫ. Шуға ул һәр аҙымын үлсәп кенә баҫырға тырышты. Әммә иптәштәренә үҙ фаразыңды әйтмәй ҙә сара юҡ. Былай күпме йөрөргә мөмкин?

– Туҡтағыҙ әле, дуҫтар, – тип иптәштәренең ҡулын нығыраҡ ҡыҫты Илнур.

– Ҡарағыҙ әле, малайҙар, – тип һаҡ ҡына өндәшеп, дуҫтарын һиҫкәндерергә мәжбүр итте Гөлнур. Ҡайҙа ҡарарға мөмкин бындай дөм ҡараңғыла? – Өҫкә ҡарағыҙ...

Өҫтә, баш осонда уҡ булмаһа ла, саҡ ҡына яҡтылыҡ төҫмөрләнгәндәй ине. Әллә яҡтылыҡ ул, әллә күҙҙәргә шулай күренәме?

– Ур-ра, яҡтылыҡ! – тип һөрән һалды Айнур.

– Тс-с, шым, – тип уны тыя һалды Илнур дуҫы. – Мәмерйәләрҙә ҡысҡырырға ярамай...

Был турала ишеткәне генә бар ине башлыҡтың. Үҙе өмөтлө яҡтылыҡтан күҙҙәре сағылғандай, сытырҙатып күҙҙәрен йомдо – хәҙер дөбөршатыр таштар тәгәрәп китер ҙә, уларҙы мәңгелеккә ошонда күмеп ҡалдырыр...

Тик был арала әлеге яҡтылыҡҡа әүрәгән Айнур менән Гөлнур уны шул яҡҡа тарткылай ҙа башланылар. Әйтерһең дә, уға табан йүгереп китеп була. Яҡыныраҡ барһаҡ, асыҡланыр әле, тип һығымта яһаны башлыҡ һәм уларға эйәрҙе. Ләкин шунда уҡ аяҡ аҫтындағы ташҡа әләгеп абынып та китте. Был барыһын да әлеге хәлдәренә кире ҡайтарҙы: ҡайҙа икәнеңде оноторға ярамай шул бында...

– Һағыраҡ, – тигән булды Айнур. – Килеп тапкас, сыға алырбыҙ инде ул...

Ләкин бер нисә аҙым атлағас та яҡтылыҡ юҡҡа сыҡты ла ҡуйҙы! Ҡайҙа ине һуң ул? Ә бында йүнәлеште билдәләп буламы ни? Ул арала алданыраҡ барған Айнур алға һуҙып килгән ҡулдары менән таш стенаға төртөлдө.

– Бында стена, дуҫтар...

– Иплән кенә кире артҡа сигәйек, – тигән тәк-

**(Өмәнең дауамы. Шарты журналдың 4-се һанында донъя күрҙе.)**

# КҮП ЯҠЛЫ ГӨЛНАЗ

**Бөгөнгө бишалышты хәҙерге Олимпия хәрәкәтенә нигеҙ һалыусы Пьер де Кубертен тәҡдим иткән. Уның фекеренсә, тап ошо ярыштар аша һәр яҡтан да үҫешкән атлеттарҙы тәрбиәләргә мөмкинлек бар.**

Хәҙерге бишалыш ошондай тәртиптә бара: атыу (пневматик пистолеттан); фехтование (әйләнеш буйынса һәр ҡатнашыусы һәр береһе менән алышып сыға); йөҙөү; конкур (ат менән ҡаршылыҡтар аша һикереү); йүгереү (кросс). Һәр ярышта аныҡ норматив балдар билдәләнгән, шуларҙы үтеп китһә, спортсыға өҫтәмә мәрәй яҙыла. Һәр ярыштан йыйылған мәрәйҙәр ҡушыла бара һәм, һөҙөмтәлә, урындар билдәләнә.

– Атҡа атланып, ҡылыс болғап сабыусы Гөлназ нисегерәк күренер икән, тип тирә-яғыма ҡарап торам, – тип ҡаршыланым мин Гөлназ Ғөбәйҙуллинаны осрашыу билдәләнгән урында. – Эргә-тирәлә күпме ҡыҙҙар, танып булырмы чемпионды, тим...

– Танынығыҙ бит, фотоны күргәнһегеҙҙер, – тип йылмайҙы ул.

– Мин Яңы Уренгой ҡалаһында тыуғанмын, – тип башланы Гөлназ үҙе менән таныштырыуҙы. – Биш йәшемдә мине йөҙөргә өйрәнергә бирҙеләр. Тәүге тренерым Дмитрий Демьянович Чирков ине. Алты йәштән мин “Тыуған ер” тип аталған 2-се мәктәпкә беренсе синыфҡа барҙым. Миңә 11 йәш тулғанда беҙ Өфөгә күсеп килдек. Мине тренер Игорь Иванович Шохов үҙенә алды. Уның менән шөғөлләнеп, мин 13 йәштә йөҙөү буйынса спорт мастеры нормативын үтәнем. Был, яңылышмаһам, Башҡортостанда беренсе шундай рекорд ине, шикелле. Быға тиклем берәйһе үтеп китмәһә (йылмая).

14 йәшемдә тренерым миңә икеалыш менән шөғөлләнеп ҡарарға тәҡдим итте (йөҙөү һәм йүгереү). Киләһе ярыштарҙа уҡ мин беренсе булдым һәм артабан бишалыш прграммаһы буйынса шөғөлләнергә булдыҡ. Йыл һайын беҙ яңы төр өҫтәй барҙыҡ, тренер минең мөмкинлектәремә бик ышана ине, гел дәртләндереп торҙо.



– Чемпиондар нисегерәк күнекмәләр үткәрә? Мәҫәлән, Сингапурға барыр алдынан һин стадиондан ҡайтмағанһыңдыр ул?

– Олимпиада алдынан көндәр ошолай ҡоролғайны: иртәнге етенән ярты сәғәт – йөҙөү, артабан мин уҡырға китәм (Гөлназ БДУ-ла уҡый). Дәрестәрҙән һуң йүгереү, атыу һәм фехтование буйынса күнекмәләр. Ат менән күнекмәләр “Аҡбуҙат” ипподромында айырым үтә. Бер төрләөк ялҡытып китмәһен өсөн, тренер күнекмәләрҙе үҙгәртеп тора.

– Шулай көндәр теҙмәһе үтеп тик торамы?

– Бынан тыш мин дуҫтар менән аралашырға яратам, фотография менән мауығам, һүрәт төшөрәм. Ваҡытым шуларынан артмай.

– Сингапур ниндәй тәьҫораттар ҡалдырҙы?

– Сингапурҙа бик йылы ине. Халҡы бик көләс, алсаҡ. Улар беҙҙең менән төрлө уйындар, конкурстар ойоштора торғайнылар, алмашына сувенирҙар, автографтар алалар. Бик күңелле булды. Шәхси беренселектә мин сирләп сығыш яһаным, температурам бик юғары ине. Шуға туғыҙынсы урынға ҡалдым.

**Гөлназ Ғөбәйҙуллинаның миҙалдар тартмаһы:**

***Европа кубогын яулау – 2007;***

***Испанияла Европа беренселегендә 2-се урын – 2007;***

***Европа кубогын яулау – 2008;***

***Ирландияла Европа беренселегендә 2-се урын – 2008;***

***Ҡаһирәлә (Мысыр) Донъя беренселегендә 2-се, 3-сө урындар – 2009;***

***Венгрияла Европа беренселегендә 3-сө урын – 2009;***

***Болгарияла Европа кубогын яулау – 2010;***

***Швецияла Донъя беренселегендә 2-се урын – 2010;***

***Сингапурҙа Беренсе йәштәр Олимпиадаһында 3-сө урын – 2010.***



дим индерҙе Гөлнур. – Әле генә күренә ине лә һуң ул яҡтылыҡ...

Шулай иттеләр ҙә. Артҡараҡ күскәс, уларға теге яҡтылыҡ тағы күренгәндәй булды: ҡайҙандыр өҫтән, тоноҡ ҡына булып килә ул. Тимәк, уға юл икенсе яҡтан, йә ул көн яҡтыһы түгел. Әллә әле төртөлгән стена ябай ғына бер күтәрмә-баҫҡыс һымаҡ ҡына һерәйеп торамы?

– Ентекләп тикшереп сыҡмай булмай, – тигән һығымта яһаны Илнур, оҙаҡ ҡына уйланып торғас. – Һәрмәнеп булһа ла шул яҡҡа юл ярабыҙ инде.

– Айырылышмайыҡ шулай ҙа, – тигән тәкдим индерҙе Айнур. – Бер-беребеҙҙе юғалтырға ғына ҡалғайны бында...

– Тимәк, алға атлайбыҙ ҙа баяғы стена буйлап йөрөп сығабыҙ, – тип һығымта яһаны башлыҡ Илнур. – Берәй осо сыҡмай булмаҫ.

Стенаға барып төртөлгәс, уның еүеш, ҡытыршы һәм буй етмәҫлек бейек икәнлеге асыҡланды.

– Күрәһең, беҙ берәй ҙур залға килеп сыҡҡанбыҙ ҙа, уның көмбәҙендә генә берәй тишек бар, – тигән һығымта яһаны Илнур.

– Нишләйбеҙ һуң? – дуҫтарының был һорауында өмөттөң саткыһы ла юҡ ине. Гөлнур хатта иларға ла ҡурҡа ине, буғай.

– Тотош стена буйлап һәрмәнеп китһәк, йә бая килгән юлға төшәбеҙ, йә өҫкә берәй юл табабыҙ, – тип әллә йыуатҡан, әллә аҡланған һымаҡ әйтеп ҡуйҙы Илнур. Тағы ни әйтә алһын инде ул бындай осраҡта?

**(Дауамы бар)**



# Йылайыр районы



Йылайыр районы Башҡортостандың көньяғында, урман-таулы ерҙә урынлашҡан. Территорияһы буйынса республикала икенсе урынды биләй. Район үҙәге – Йылайыр ҡасабаһы. 57 ауылда 19 мең кеше йәшәй.



Гербында көмөш фонда ике йәшел тау араһында башын ғорур күтәреп сабып барған, ҡара таптар менән сыбарланған ҡыҙғылт төҫлө болан һүрәтләнгән. Ғорур болан – ошо ерҙе төйәк иткән Түңгәүер һәм Үҫәргән ырыуы башҡорттарының батырлығын, яугирлығын күрһәтә. Болан – тыныслыҡ һәм киң күңеллелек билдәһе лә. 450 йыл элек тап Йылайыр ерендә урынлашҡан Айҙа болон яланында ете башҡорт ырыуы башлыҡтары йыйылып, Рәсәй батшалығына ҡушылырға тигән ҡарарға килә. Башҡортостанға автономия биреү шарты менән Башҡорт ғәскәренең советтар яғына сығыуы тураһында тарихи ҡарар ҙа Йылайыр районының Кананикольск ҡасабаһында ҡабул ителә.

Герб аҫтындағы өс көмөш тулҡын һәм өҫтәге дүрт йәшел ағас был ерҙәрҙең урман-һыуҙарға бай булыуын күрһәтә, ә дүрт мөйөштәге ағас һүрәттәре райондың урмандарға байлығын аңлата.

Районның флагы аҡ фонда герб элементтарынан ғибәрәт.

2006 йылда ҡабул ителгән.

Авторы – Салауат Ғиләжетдинов.





Башҡортостан Республикаһы



Ҡабарҙы-Балҡар Республикаһы



Тыва Республикаһы

# ТӨРКИ ДОНЪЯ

Беҙҙең дәүергә тиклем беренсе мең йыллыҡ тирәһендә үк Алтай һәм Ҡытай далаларында халыҡ булып ойошҡан төрки халыҡтары берләшмәләре, алыҫ араларға күсенеп, урта быуаттарҙа Европаны ялай башлай (Вена ҡалаһына тиклем) һәм 11-се быуатҡа тиклем Урыҫ кенәзлектәрен, Кавказ аръяғын үҙ ҡулдарында тота.

13-16-сы быуаттарҙа булған, бик ҙур территорияны биләп ятҡан Осман империяһы тарҡалғас (ул үҙ эсенә Урта Азияны, Яҡын Көнсығышты, Төньяҡ Африканы һәм Балҡан ярымутрауын алған), 16-18-се быуаттарҙа Рәсәй империяһы байтаҡ төрки дәүләттәрҙе үҙ эсенә йота: Ҡаҙан, Әстрәхан, Себер, Ҡырым, Урта Азия ханлыҡтары.

Бөгөн төрки телле дәүләттәр иҫәбенә Төркиә, Үзбәкстан, Төркмәнстан, Әзербайжан (90 процентҡа тиклем халҡы төрки телле), Ҡырғыҙстан (80%) һәм Ҡаҙағстан (75 %) инә. Бынан тыш Ҡытайҙа Синьцзян-Уйғыр автономиялы районы төрки телле һанала (64 %). Молдова республикаһындағы Ғағауз автономиялы территориаль берәмеге лә төрки дәүләттәр иҫәбенә керә. Донъяла төркиҙәр һаны 150 миллионға етә.

Әлеге Рәсәй дәүләте территорияһында төрки телле халыҡтар байтаҡ ҡына: Башҡортостан, Татарстан, Дағстан, Ҡабарҙы-Балҡар, Хакас, Тыва, Алтай, Саха (Яҡутстан), Ҡарасәй-Черкес, Сыуаш республикалары.



Төрөк Республикаһы



Үзбәкстан Республикаһы



Төркмәнстан



Ҡырғыҙ Республикаһы



Ҡаҙағстан Республикаһы



Ғағауз автономияһы



Әзербайжан Республикаһы



Дағстан Республикаһы



Алтай Республикаһы



Ҡарасәй-Черкес Республикаһы



Татарстан Республикаһы



Хакас Республикаһы



Сыуаш Республикаһы



Саха (Яҡутстан) Республикаһы

# Башваткыс

Һеҙҙең алдығыҙҙа 17 шырпынан төҙөлгән фигура. Унда 6 дүртмөйөш бар.

5 шырпыны алып, башкаларына теймәй генә, бында 3 кенә дүртмөйөш калдырырға кәрәк.



Был башваткыста 4 шырпыны алып, 5 шакмак яһарға кәрәк.

## Бау менән башваткыс

Өстәлгә ярайһы оҙон бауҙы һуҙып һалығыҙ. Ә хәҙер бауҙың ике осонан алып, шулай тоткан килеш кенә бауҙы төйнәп карағыҙ. Килеп сығамы?

Яуабы: Бының өсөн башта ук кулдарҙы сатрашлап алырға һәм бауҙы шулай эләктерергә кәрәк. Аҙактан кулдарҙы кире тартып сығарһаң, бауҙа төйөн үҙенән-үҙе барлыкка киләсәк.

## Сөләймән батшаның мисәте



Сөләймән батшаның табуты тышында уның данлыклы мисәте төшөрөлгән. Унда нисә өсмөйөш барлығын һанап сығарығыҙ.

Яуап: 31 өсмөйөш.

## Өс тәңкә

Ике атай һәм ике ул юл буйлап китеп барғанда, өс тәңкә табып ала. Улар тиҙ генә, кеше күрмәҫ борон, аксаларҙы тигеҙ итеп бүлешеп ала ла, юлды дауам итә. Быны улар нисек башкарған?



Яуап: Асылда кешеләр өсәү генә булған: олатай, атай һәм ейән.

## Тарих төпкөлөнән һорау

Боронғо Грецияла уны ирҙәр ҙә, катындар ҙа кейгән, тик үҙҙәре уйлап тапмаған, ә Фарсы дәүләтенән алған. Ә Мысырҙа ул борондан билдәле булған. Римдар уны империя осоронда куллана башлаған, ә Францияла иһә уны Людовик XIII 1624 йылда файҙаланырға карар иткән. Уның ниндәй сифаты быға сәбәпсе булған һәм нимә тураһында һүҙ бара?

Яуап: Сәсе булмауы. Ә һүҙ парик тураһында бара.

## Нисә өйрәк?



Һауала бер туп өйрәк осоп бара: берәү алдан, икәү арттан төшкән, берәү иң арттан эйәргән һәм икәүһе алдан бара, берәүһе икеһенең араһында урынлашкан һәм өсәүһе бер рәткә теҙелгән. Нисә өйрәк оса һауала?

Яуап: өс өйрәк.

# Көләмәстәр

**Уҡытыусы үҙенең элекке уҡыусыһын осрата.**

**– Шунан, хәҙер һин ни менән шөғөлләнәһең инде?**

**– Метеоролог булып эшләйем.**

**– Һы... Ә ниндәй намыҫлы, дөрөҫлөктө яратҡан малай инең...**

* * *

– Һин был шиғырыңды әле береһенә лә уҡыманыңмы? – тип һорай түңәрәк етәксеһе йәш шағирҙан.

– Юҡ әле, быны һеҙгә генә...

– Ай-һай, күҙең күгәргән бит...

* * *

**– Атай, ә фәрештә нимә була ул?**

**– Беләһеңме, ул бәләкәс кенә, ҡанаттары бар, осоп йөрөй...**

**– Сағамы?!**

* * *

– Атай, бөгөн машинаңды алып торайым әле?

– Һиңә аяҡтар ни өсөн бирелгән, улым?

– Газ һәм тормоз педаленә баҫыр өсөн.

* * *

**Әгәр минең телефонда шылтыратҡан кешенең исеме кем булып күренеүен белһәләр, миңә береһе лә шылтыратмаҫ ине.**

* * *

– Хәбирә, һин бөгөн шундай матурһың...

– Мин көн дә шундаймын да инде.

– Тик бөгөн хатта киң күңеллерәк тә күренәһең...

– Кит әле, Сабир, мин дә бөгөн математиканан өйгә эште сисә алманым!

**Тышлыкта – I Үҫмерҙәр олимпиадаһында пентатлон буйынса ярышта бронза миҙал яулаған Гөлназ Ғөбәйҙуллина.**


# АМАНАТ©

**Республика балалар-үҫмерҙәр журналы**

**Республиканский детско-юношеский журнал**

**№ 10 (803), Октябрь, 2010**

Ойоштороусылары: Башҡортостан Республикаһының «Аманат» журналы редакцияһы ҡаҙна предприятиеһы һәм Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ.

Учредители: Казенное предприятие Республики Башкортостан Редакция журнала «Аманат» и Управление по делам печати, издательства и полиграфии при Правительстве Республики Башкортостан.

**Баш мөхәррире – Сәлмән ЯРМУЛЛИН**

Мөхәрририәт:
Артур СУРИН, Розалия САБИРОВА, Азамат ЮЛДАШБАЕВ, Фәрзәнә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА, Айһылыу АБДУЛЛИНА (баш мөхәррир урынбаҫары), Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ (яуаплы сәркәтип), Нурия ӘХТӘМОВА (бүлек мөхәррире), Артур ТАПАҠОВ (биҙәлеш мөхәррире).

1929 йылдың мартынан нәшер ителә.
Айына бер тапҡыр башҡорт телендә сыға.
Урта һәм оло йәштәге мәктәп балалары өсөн.
Издается с марта 1929 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.
Для детей среднего и старшего школьного возраста.

Киң коммуникациялар, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау даирәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан 2007 йылдың 21 декабрендә теркәлде.

Журналды теркәү тураһында таныҡлыҡ ПИ № ФС77-30612

Зарегистрирован Федеральной службой по надзору в сфере массовых коммуникаций, связи и охраны культурного наследия 21 декабря 2007 года.

Свидетельство о регистрации ПИ № ФС77-30612

БЕҘҘЕҢ АДРЕС:
450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2. «Аманат» журналы редакцияһы.
450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2. Редакция журнала «Аманат».

ТЕЛЕФОНДАР:
баш мөхәррир – 277-73-46; яуаплы сәркәтип – 277 – 74 – 80; компьютер бүлеге – 223 – 91 – 83
e-mail: amanat@yandex.ru
Беҙҙең сайт: http://www.journal-amanat.ru

РЕКВИЗИТТАР:
г. Уфа, ИНН 02 78 02 12 11, КП РБ Редакция журнала “АМАНАТ”
р/с 40602810700000000017, в филиале ОАО “УралСиб”,
к/с 30101810600000000770 БИК 048 073 770

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
Адресы: 450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2.
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
Адрес: 450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2.

Редакция һеҙҙән килгән хаттарҙы иғтибар менән ҡарай, яҙышып тороуығыҙ өсөн шатлана. Әммә һәр берегеҙгә яуап бирә алмай. Беҙҙең материалдарҙы файҙаланғанда «Аманат» журналына һылтаныу мотлаҡ.

Баҫырға ҡул ҡуйылды 07.10.2010. Ҡағыҙ форматы 84х108 $^{1}/_{16}$. Офсет ысулы менән баҫыла. Күләме 2,25 баҫма табаҡ, 6,05 иҫәп-нәшриәт табағы. Тиражы 11090. Һатыуҙа – хаҡы ирекле. Заказ № 2.0143.10.

Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.

**Яңы китап**

# БАШҠОРТСА УҠЫП БЕЛҺЕНДӘР

Үҙ халҡың мәҙәниәтенән дә тыш, сит ил мәҙәниәтен белгән уҡыусы Ер шарын әйләнеп сыҡҡан сәйәхәтсегә тиң. Быңдай уҡымышлы бала, бер нисә мәҙәниәтте төптән белеп, уны үҙ-ара сағыштыра һәм белемен арттыра ала.

Шөкөр, Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте йыл да бер-бер артлы балалар өсөн сағыу китаптар сығарып тора. Хөкүмәтебеҙ ярҙамы менән тормошҡа ашырылып килә был изге эш. Эшҡыуар ағай-апайҙар ҙа, үҙ аҡсаларын сарыф итеп, балалар өсөн зауыҡлы китаптарын йәлләмәй. Әммә бөгөнгә көнгә тиклем башҡорт теленә тәржемә ителгән сит ил әкиәттәре бармаҡ менән генә һанарлыҡ булһа, китап итеп сығарылғандары бөтөнләй юҡ кимәлдә ине. Ниһайәт, ошо көндәрҙә балаларҙы һәм ата-әсәләрҙе ҡыуандырып, матур сағыу тупланма донъя күрҙе (һүрәттәрҙе ҡарағыҙ).

Был китаптарҙа бирелгән ҡыҫҡаса оригиналдар буйынса бәләкәстәр мәктәптә өйрәнгән тиклемен сит телдә уҡып ҡарар, айырма тойор, телдәрен шымартыр.

**Айһылыу АБДУЛЛИНА**
**әҙерләнә.**





















Китаптарҙы түбәндәге адрес буйынса һатып алырға мөмкин: 450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты урамы, 2, 4-се ҡат, «Инеш» нәшриәте. Телефондар: 8 (347) 282-49-88, 8-987-255-39-18. Ете китаптан торған тупланманың хаҡы– 150 һум.




Аманат, № 09, 2010 йыл

# Минең республикам!

Был һанда Ҡәсим Дәүләткилдиев исемендәге республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты уҡыусыларының “Минең республикам!” конкурсына килгән ижади эштәрен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ.

1. **“Минең йортом”.** Илгиз Таһиров (етәксеһе – Р. Ф. Сәлихова).
2. **“Һабантуйҙа”.** Марат Ғилметдинов (етәксеһе – В. К. Гапуневич).
3. **“Беренсе йәшен”.** Надир Сынбулатов (етәксеһе – Р. Ф. Сәлихова).
4. **“Теремек аттар”.** Алена Михайлова (етәксеһе – З. А. Ғәлимова).
5. **“Ел менән ярышып”.** Нәфис Тарханов (етәксеһе – Г. А. Гәрәева).
6. **“Тыуған яғым”.** Ишдәүләт Ғүмәров (етәксеһе – Р. Ф. Сәлихова).
7. **“Благовещен ҡалаһы күренештәре”.** Маша Улькина (етәксеһе – В. К. Гапуневич).
8. **“Баҡсамда”.** Айгүзәл Һибәтова (етәксеһе – З. А. Ғәлимова).
9. **“Бала саҡ”.** Роза Тарханова (етәксеһе – Г. И. Исмәғилова).
10. **“Яйыҡ йылғаһы”.** Д. Ялаев (етәксеһе – В. К. Гапуневич).
11. **“Урал батыр”.** Илшат Үҙәнбаев (етәксеһе – Л. А. Госачинская).


1


2


3


4


5


6


7


8


9


10


11

Журналдың индексы – 73317